*Саманан ашҡан ҙур ҡорһаҡ,*
*Ялҡаулыҡ үә зәғиф иман,*
*Ғәмһеҙ булып, артыҡ йоҡлау -*
*Өммәтем өсөн шул яман.*
*Раул Бикбаев. "Өс йөҙ ҙә өс хәҙис".*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

12 - 18 АПРЕЛЬ (АЛАҒАРАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№15 (589)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Мутлыҡ менән...**
муллыҡҡа өлгәшеп буламы?



3

**Ауылдар йәнә һынау алдында:**
нигеҙҙе дауам итергәме, әллә көсеп китергәме?



8-9

**Халыҡ йырҙарһыҙ...**
йыраусылыҡ булмаç



11

**Ауылдарыбыҙға хужа булайыҡ!**
Был саҡырыу бар тарафҡа тарала



13

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ҡала башҡорттарына арналған фәнни-ғәмәли конференцияла һүҙ нимә хаҡында барырға мөмкин?

***Айбулат ПСӘНЧИН, география фәндәре докторы, профессор:*** Ҡала башҡорттарына арналған тәүге фәнни-ғәмәли конференция 2000 йылда үтте һәм ул ҡала мөхитендә башҡорт телен һаҡлап ҡалыуға арналды. Ағымдағы йылдың 17 апрелендә Күмертау ҡалаһында буласаҡ сираттағы, һигеҙенсе, конференцияла ла телгә ҡағылышлы мәсьәлә төп урынды аласаҡ. Бөгөнгө көндә, мәғариф өлкәһендә барған үҙгәртеп ҡороуҙар ваҡытында, был актуаль мәсьәлә. Мәçәлән, хәҙер мәктәптәрҙә уҡыусылар йәшәү урыны буйынса комплектлана. Улар араһында төрлө милләт балаларының булыуы белем биреү процесында алтын урталыҡты табыуҙы күҙаллай. Ләкин Башҡортостанда йәшәүебеҙ башҡорт телле кластарҙың, башҡорт мәктәптәренең булыуы мөһимлеген, мәктәптәрҙә башҡорт теленең уҡытылыуын төп урынға ҡуя. Башҡорт балалары үҙ телендә белем алырға, ә башҡа милләт вәкилдәренең балалары башҡорт телен республика теле булараҡ өйрәнергә бурыслы.

Конференцияла ҡараласаҡ тағы бер мөһим мәсьәлә - ул этнодемографик проблема. Ауылдарҙа, ғәҙәттә, күп балалы ҙур ғаиләләр өçтөнлөк итә, ә ҡалала, урбанизация тәьçире һөҙөмтәһендә, балалар һаны кәмей. Тимәк халыҡ һаны ла кәмей, тигән һүҙ. Шулай уҡ был өлкәгә ҡағылышлы тағы бер үҙенсәлекте билдәләп үтергә кәрәк. Ауылда туғанлыҡ бәйләнеше көслө. Туған тейешле кешеләр бер-береһе менән аралашып, ҡатнашып, хәл белешеп йәшәй. Ә ҡала ерлегендә иһә ошо бәйләнеш күп осраҡта юғала. Алыç туғандарҙың ғына түгел, хатта бер туғандарҙың да аралашыуы сикләнеүе йәки бөтөнләй туҡтап ҡалыуы күренеше күҙәтелә.

Шулай уҡ иғтибарға лайыҡ тағы ла бер мөһим аспект - урыç мөхите баçып алған ҡалала башҡорт ҡала мөхитен үçтереү мәсьәләһе. Әлеге ваҡытта был мөхит юҡ, тип әйтеп булмай, ләкин ул бик аҡрын үçешә. Уны әүҙемләштереү өсөн телевидение, төрлө матбуғат саралары тарафынан эшмәкәрлек киң йәйелдерелергә тейеш. Балаларға һәм йәштәргә башҡорт мөхитендә уҡыу, ял итеү, буш ваҡыттарын уҙғарыу мөмкинлеген күберәк бирергә кәрәк. Бөгөн ошо юçыҡта төрлө саралар уҙғарыла, әлбиттә, ләкин уларҙың һанын һәм сифатын тағы ла арттырһаҡ, күпкә яҡшыраҡ һөҙөмтәләр көтөргә була.

Бөгөн юғары технологиялар заманында көн итәбеҙ һәм ошо өлкәлә лә башҡорт телен әүҙем ҡулланыу мөмкинлеген арттырыу мәсьәләһе киçкен тора. Шуға күрә конференция был теманы ла урап үтмәйәсәк. Шулай уҡ республика төбәктәрендә башҡортса һөйләгән радиоселтәр нөктәләрен тергеҙеү, ҡала шарттарында һаулыҡты һаҡлау, демографияны үçтереү мәсьәләләре хаҡында ла һүҙ күтәреләсәк.

**(Дауамы 2-се биттә).**


ИҒТИБАР!

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ.**

- Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **336 һумға** яҙылырға була.
- Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға **246 һум**.
- Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **246 һум**.

**Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу** мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында **"Яҙылыу"** тигән төймәгә баçып, **"Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу (534 һум 42 тин)"** һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкҡа үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.


АФАРИН!

## ЮРМАТЫ БАТЫРЫ...

### көрәштә асыҡланды



**Айнур СОБХАНҒОЛОВ, Ишембай нефть колледжының 1-се курс студенты, "Юрматы батыры" титулын яулаусы:**

- Тыумышым менән Стәрлебаш районы Ҡабаҡҡыуыш ауылынанмын. Был бәйгелә Ишембай командаһы составында сығыш яһаным. Ярыш булғас, кемдер еңә, ә кемдер еңелә инде. "Юрматы батыры" исемен яулау - минең өсөн көтөлмәгән бәхет булды. Ололап, елән, бүрек кейҙерҙеләр, түргә ултырттылар. Үҙемде ысын батыр итеп хис иттем хатта. Ошондай халҡыбыҙҙың рухын, характерын сағылдырған милли спорт ярыштары күберәк үтһен ине, тип теләге килә. Республика ярыштарында ҡатнашҡаным юҡ, әммә әлеге бәйге киләсәктә яулаясаҡ еңеүҙәргә лә өмөт уятты, нығыраҡ әҙерләнеп, республика кимәлендәге ярыштарға сығырға, тигән сәм барлыҡҡа килде. Милли көрәш менән шөғөлләнә башлағас, уҡыуым да яйға һалынды, киләсәккә маҡсаттарым да аныҡлана төштө. Бында тренерҙарым Мансур Һөйәрғоловтың, Нурулла Хисмәтуллиндың өлөшө ҙур. Бер туған ҡустым да минә эйәреп спортҡа ылыға - шул да һөйөндөрә.

**(Теманың дауамын 5-се биттә уҡығыҙ).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Ҡала башҡорттарына арналған фәнни-ғәмәли конференцияла һүҙ нимә хаҡында барырға мөмкин?

(Башы 1-се биттә).

***Ғәфүр СӘЛИХОВ, философия фәндәре докторы, профессор, БДУ-ның философия һәм социология факультеты деканы:*** Халыҡты тел барлыҡҡа килтерә, бергә туплай. Әгәр ҙә тел йәшәй икән, тимәк, халыҡ та йәшәй. Шуға күрә ҡала башҡорттарына арналған фәнни-ғәмәли конференцияларҙа, тәү сиратта, телебеҙҙе һаҡлау хаҡында, шул иҫәптән ҡала шарттарында ла, һүҙ алып барылырға тейеш, тип уйлайым. Беҙҙең үҙ республикабыҙ бар, башҡорт телендә һөйләшкән, аралашҡан халҡыбыҙ бар, шуға күрә телебеҙ үлгән телдәр исемлеген тулыландырмаһын өсөн бөтә тырышлығыбыҙҙы һалырға кәрәк. Ләкин өйҙә, балалар баҡсаһында, мәктәптә, эш урынында ғына башҡортса һөйләшеп, телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу еңел түгел. Шулай уҡ был өлкәлә уңышҡа өлгәшеү өсөн урындағы ғалимдарҙың һәм етәкселектең генә тырышлығы ла әҙ. Телде һаҡлау өсөн Рәсәй Хөкүмәте кимәлендә бер-нисә йылға иҫәпләнгән Программаның ҡабул ителеүе һәм тормошҡа ашырылыуы мөһим. Шул саҡта ғына һөҙөмтәле эш хаҡында һүҙ йөрөтөргә һәм телебеҙгә иғтибар хаҡында әйтергә була.

***Зөһрә БУРАҠАЕВА, яҙыусы:*** Бындай конференцияларҙың уҙғарылыуы яҡшы, әлбиттә, ләкин, минеңсә, ҡала башҡорттарының бар мәсьәләләре лә хәл ителгән. Миҫал өсөн үҙем эшләгән мәҙәни өлкәне генә алып ҡарағанда ла ҡала башҡорттары өсөн бөтә уңайлыҡтар, мөмкинлектәр булдырылған. Башҡорт телендә йөкмәткеле гәзит-журналдар сыға, китаптар баҫыла, ләкин уларҙы алдырыусы ҡала башҡорттары һирәк, театрҙар матур, фәһемле спектаклдәр ҡуя, тик унда тамашасы йөрөмәй, үҙ телебеҙҙә һөйләп торған телевидениебыҙ, радиобыҙ бар, әммә тапшырыуҙарҙы ҡарамайҙар. Юғары кимәлдә ойошторолған сәнғәт саралары булып тора, ләкин унда милли интеллигенцияны һирәк күрергә тура килә. Ә уларҙың балалары, ейән-ейәнсәрҙәре хаҡында һүҙ йөрөтәһе лә түгел.

Шулай уҡ башҡорт теле яҙмышы хаҡында борсоулы һөйләшеүҙәр, туған телдә аралашыу мәсьәләһен күтәреүселәр күп. Ләкин был хаҡта күпме генә әсенеп һөйләмә, мәсьәлә хәл ителмәй, сөнки күптәр аралашҡанда үҙ-ара урыҫ телендә аңлаша. Был бигерәк тә ҡала башҡорттары араһында киң таралған. Шулай уҡ ауылдан ҡалаға күсеп килеүселәр ҙә балалары менән урыҫ телендә аралашырға тырыша. Балаларын башҡорт балалар баҡсаһына, мәктәбенә уҡырға бирәләр, ә өйҙә үҙ-ара русса һөйләшәләр. Хатта башҡорт мәктәптәрендә башҡорт теленән уҡытҡан уҡытыусыларҙың да 80 проценты үҙ балалары менән русса һөйләшә. Дәрестә башҡорт телен һаҡлау, туған телдә аралашыу тураһында һөйләйҙәр ҙә, уҡыусылары алдында уҡ ошоноң тап киреһен эшләйҙәр.

Суверенитет беҙгә күпте бирҙе, төрлө өлкәлә ҡаҙаныштарыбыҙ бихисап, ләкин халыҡтың, шул иҫәптән, ҡала башҡорттарының да үҙаңы кәмей бара. Был парадоксаль, борсоулы күренеш, ләкин бөгөнгө ысынбарлыҡ шулай. Шуға күрә ошо ике мәсьәләнән генә сығып ҡарағанда ла, проблема кемдеңдер нимәлер эшләүэшләмәүендә түгел, ә шәхси үҙаңдың түбән булыуында, үҙ булмышыбыҙҙың юҡҡа сыға барыуында. Һәр кем ошо хаҡла уйланып, үҙе өсөн һығымталар эшләргә һәм алдына аныҡ маҡсаттар ҡуйырға бурыслы.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ҮЖӘТЛӘНЕҮ ҘӘ...

## рухи көрсөккә килтерә

**Ғиниәтулла ҠУНАФИН, БР Фәндәр академияһы академигы, филология фәндәре докторы, БДУ профессоры:** Бөгөнгө көндә беҙгә төрлө йүнәлештә - иҡтисад, сәйәсәт, социология, теүәл фәндәр өлкәһендә эшләгән, шулай уҡ төрлө заманса техниканы белгән милли интеллигенция кәрәк. Быны өсөн уҡырға, интеллектуаль-мәҙәни кимәлебеҙҙе, сәйәси аңыбыҙҙы күтәрергә, иҡтисадҡа иғтибарҙы күп бүлергә тейешбеҙ. Ҡыҙғаныска ҡаршы, һуңғы осорҙа йәштәребеҙ был йәһәттән, халыҡса әйткәндә, үжәтләнә төштө. Мин был осраҡта үҙебеҙҙең иҡтисадты үҫтерерҙәй, бизнес менән шөғөлләнерҙәй кешеләребеҙ булырға тейешлекте күҙ уңында тотам. Эшҡыуар, тигәндә, алдыҡҡа ҡоролған алыпһатарлыҡты түгел, ә үҙенең программаларын, концепцияларын барлыҡҡа килтереп эшләгән, үҙ тирәһенә милләттәштәрен туплаған эшлекле шәхесте таныйым. Ул төҙөүсе икән, әйҙә, милләттәштәренән ошо уҡ һөнәр оҫталарын йыйһын, эш менән тәьмин итһен. Ҡыҙғаныска күрә, беҙҙә ошондай тупланыу күренеше күҙәтелмәй. Мин Өфө ҡалаһында алыпһатарлыҡ өлкәһендә эшләүселәр араһында күкрәк киреп үҙ халҡына хеҙмәт итерҙәй, меценат булырҙай, бағыусылыҡ менән шөғөлләнерҙәй үҙебеҙҙең милләт вәкилдәрен күрмәйем. Аҡсаның, бизнестың милләте юҡ, тиҙәр. Был яңылыш фекер. Халыҡ әйтмешләй, кемдең ҡулында - шуның ауыҙында. Беҙҙең егет-ҡыҙҙарыбыҙ шуны аңлап, халҡын матур эштәргә ойошторорҙай эшҡыуарҙар, хатта миллионер, миллиардерҙар булып китһә, бик һәйбәт булыр ине.

Республиканы формалаштырыусы халыҡ - башҡорт халҡы. Ошо күҙлектән сығып, беҙгә бөгөнгө көндә Башҡортостан Республикаһының иҡтисади-мәҙәни үҫеш программаһын эшләргә кәрәк. Иң элек республиканың төп халҡының мәнфәғәтен, тормош шарттарын, рухи кимәлен үҫтереүҙе күҙ уңында тотҡан перспективалы программа булырға тейеш был. Башҡорт халҡының башҡа ере, иле, йорто юҡ. Ул Мәскәүгә барып, иҡтисадын үҫтерә алмай, Түбәнге Новгородҡа барып та ундай дәғүә ҡуйырға хаҡы юҡ, Украина, Ҡаҙағстанға барып даулашып йөрөп булмай. Тик Рәсәй Федерацияһы эсендә булған Башҡортостан Республикаһы территорияһында ғына ошондай талаптарҙы ҡуя ала һәм ҡуйырға тейеш. Башҡорттоң йәшәйеше тик ҡурай ғына түгел, башҡорттоң йәшәйеше йыр, "Байыҡ" конкурсы ғына ла түгел. Башҡорттоң йәшәйеше - туған телде, фән, мәғариф системаһын үҫтереү, уның рухи хоҡуҡтарының һанланыуы, уның йәшәү шарттарын, әпәкәйен булдырыу тураһында хәстәрлек күреү. Кешегә тәүлегенә 24 сәғәт бирелгән, ошо ваҡытты һәр кем милләтенә файҙа килтерерлек эштәр менән шөғөлләнеп үткәрергә тейеш. Мәҫәлән, студент университетҡа уҡыйым, тип килгән икән, тейешле кимәлдә белем алып сығырға тырышһын. Ул юғары уҡыу йортонан ҡулына ҡатырға тотоп сығып китеүҙе генә маҡсат итеп ҡуйырға тейеш түгел. Йәш кеше киләсәген күҙаллап, алдан уйланып йөрөргә тейеш. Ул уйланмаһа, ул янмаһа, мин янмаһам, кем яныр һуң беҙҙең милләт өсөн? Бөгөн шундай ваҡыт, ҡылыс болғап, һүҙ һөйләп, мылтыҡ күтәреп кенә мәсьәләләр хәл ителмәй. Сөнки бөгөн интеллектуаль, мәҙәни заман, кәңәшләшеп, уртаға һалып һөйләшеп эш итеү заманы. Әлеге ваҡытта юғары вазифаларға етәксе кадрҙар таба алмай ултырабыҙ икән, тимәк, башҡорт милли интеллигенцияһы көрсөк кисерә, тигәнде аңлата был. Лауреат булған, исемдәр күтәреп йөрөгән кешеләребеҙ була тороп, шулар араһында стратегик программа төҙөп, халыҡты берләштереп, эшләтеп алып китерлек бер генә булһа ла абруйлы шәхес булмауы беҙҙең милли аңыбыҙ, интеллектуаль кимәлебеҙ, рухиәтебеҙҙең, хатта милли фәлсәфәбеҙҙең көрсөккә килеп терәлеүен сағылдыра түгелме? Көрсөктән нисек сығыу тураһында, әйҙәгеҙ, бергәләп уйлашайыҡ, тип мөрәжәғәт итке килә милләттәштәргә...

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Рәсәй почта хеҙмәтенән беҙҙе лә, һеҙҙе лә тетрәндерер хәбәр килеп етте: гәзит-журналдарға яҙылыу хаҡы бер ваҡытта булмағанса ҡимммәтләнде.**

• 2014 йылдың икенсе яртыһына 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә **507 һум 72 тингә**, 50673 индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) **537 һум 72 тингә** яҙылырға кәрәк буласаҡ. Ләкин ошо хаҡтың яртыһынан аҙы - **246 һумы** ғына беҙҙең редакция билдәләгән хаҡ булыуын да белеп ҡуйығыҙ.

• 2014 йылдың икенсе яртыһына февралдә үк яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙ **Ф. Низаметдинова** (Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Муса ауылы), **А. Ғәйетҡолова** (Учалы районы Истамғол ауылы) - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, **Нәғимә Илһамова** (Әбйәлил районы Аҫҡар ауылы), **Риф Кирәйев** (Ауырғазы районы Мораҙым ауылы) - **"История башкирского народа" китаптарына лайыҡ булды**.

• **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Апрелдә 2014 йылдың икенсе яртыһына "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыбыҙ 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

**Гәзит уҡыусыларыбыҙ ошондай ауыр һынауҙар мәлендә лә гәзитебеҙгә яҙылыу юлдарын, сараларын табыр, тип ышанып ҡалабыҙ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов дөйөм белем биреү мәктәптәренең иң яҡшы сығарылыш уҡыусылары өсөн "Уҡыуҙа айырыуса ҡаҙаныштары өсөн" төбәк миҙалын булдырыу тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Сығарылыш уҡыусылары өсөн алтын һәм көмөш миҙалдар 2013 йылда "Мәғариф тураһында"ғы яңы закон индереү менән бәйле бөтөрөлгәйне. Аңлатма ябай булды - миҙалдар юғары уҡыу йорттарына ингәндә бер ниндәй ҙә ташлама бирмәй.

✓Рәсәй Хөкүмәте Ҡырым Республикаһының 14 районын һәм бер ҡалаһын, шулай уҡ федераль әһәмиәттәге Севастополь ҡалаһын илдең 16 субъектына беркетеү схемаһын раҫланы, уға ярашлы уларҙың юғары вазифалы кешеләренә коммуналь хужалыҡ һәм социаль өлкә объекттары эшен тәьмин итеүҙә методик һәм матди ярҙам күрһәтергә ҡушылды. Бүлеүгә ярашлы Башҡортостан Ҡырымдың Белогорск районына яуаплы буласаҡ.

✓Ошо көндәрҙә республика Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Рәүф Ноғоманов етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы Симферополдә булды. Шул уҡ көндө делегацияның Ҡырым Республикаһы Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Рөстәм Темирғәлиев менән осрашыуы уҙҙы.

✓Бөйөк Еңеү байрамы алдынан Бөтөн Рәсәй халыҡ фронтының төбәк бүлексәһе "Георгий таҫмаһы" акцияһы үткәрәсәк. Активистар 18 апрелдә Еңеү символын республика халҡының бөтә теләүселәренә таратасаҡ. Бынан тыш та мөһим акциялар буласаҡ. Тематик цикл 10 майҙа "Аҡбуҙат" ипподромында ҙур байрам менән тамамланасаҡ.

✓Екатеринбургта 12-13 апрелдә XII Төбәк башҡорт мәҙәниәте фестивале үтә. Сара тантана сиктәрендә ике көн барасаҡ. Ойоштороусыһы - Свердловск өлкәһе Башҡорт үҙәге. Фестиваль сиктәрендә "Башҡорттар - Көньяҡ Уралдың төп халҡы" төбәк-ара ғилми-ғәмәли конференцияһы уҙасаҡ. Конференцияла Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетынан, Рәсәй Фәндәр академияһының Башҡортостан Республикаһы, Урал бүлексәләренән, шулай Рәсәй Федерацияһының башҡа төбәктәренән ғалимдар ҡатнашасаҡ.

*✓ Хәҙер уларҙың күпселеге ауылға бесән сабышырға, утын әҙерләргә түгел, тик ял итергә генә ҡайта. Шулай итеп, шәхси хужалыҡтарҙа ла үҙ ҡулың менән эшләү иҡтисади яҡтан отошһоҙ тип иҫәпләнә.*



КӨНАУАЗ

# МУТЛЫҠ МЕНӘН...

## муллыҡҡа өлгәшеп буламы?

**"Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ" әйтеме тәрбиәһе тәьҫирендә үҫкән беҙҙең быуын араһында балта-көрәк тота белмәгән ир-ат юҡ кимәлендә ине. Колхоз-совхоздар бөтөрөлөп, ауыл ерендә йүнле эш ҡалмағас, хәҙерге бала-саға етмеш түгел, ете һөнәр белеп үҫһә, шөкөр итергә генә ҡала әле ул.**



Баҙар иҡтисады шарттарында, һәр эште тик профессионалдар башҡарырға тейеш, тигән ҡараш еңеп килә. Түләргә аҡсаң булһа, һиңә бесәнен дә, утынын да әҙерләп, өйөңә килтереп бирәләр. Был эштәрҙе элек, әлбиттә, атаәсәнең балалары башҡара ине. Әммә хәҙер уларҙың күпселеге ауылға бесән сабышырға, утын әҙерләргә түгел, тик ял итергә генә ҡайта. Шулай итеп, шәхси хужалыҡтарҙа ла үҙ ҡулың менән эшләү иҡтисади яҡтан отошһоҙ тип иҫәпләнә. Мал-тыуар аҫрағансы, баҡса тотҡансы, магазиндан әҙер һөт, май, билмән, йәшелсә һатып алыу осһоҙораҡҡа төшә, тип уйлағандар арта. Ҡалала йәшәүселәр араһында өйҙә тукланмайынса, берәй ашханаға барып ашауҙы отошлораҡ күргәндәр барлыҡҡа килде. Өйҙә ремонтты үҙ ҡулдарың менән эшләгәнгә ҡарағанда, тейешле оҫталарҙы яллау еңелгә төшә, әлбиттә. Профессионалдар һәр эште лә дилетанттарҙан оҫтараҡ башҡара бит. Ошо юлдарҙы яҙҙым да, шикләнеп ҡуйҙым: бынын хаҡ түгел икәненә көн һайын тиерлек шаһит булып торабыҙ ҙаһа. Йә тегендә, йә бында нимәлер емерелә, кемдер сифатһыҙ аҙыҡтан ағыулана, табиптарҙың хатаһы арҡаһында ауырыуҙар имгәнә. Ни өсөн профессионалдар үҙ эшен насар башҡара һуң?

Бында Америка яҙыусыһы Джон Гарднерҙың "Һәр профессияла кешеләрҙең 85 проценты компетентлы түгел", тип әйткәне иҫкә төшә. Был күҙәтеүҙе тәбиғи закон тип тә ҡабул итәләр. Тимәк, был күренеш беҙҙең өсөн генә түгел, ә бөтә кешелек өсөн хас нәмә.

Кем ул профессиональ рәссам, яҙыусы, артист, журналист? Профессионал булыу өсөн тейешле уҡыу йортон тамамлап, диплом алыу ғына етәме? Быға һәр беребеҙ кире яуап бирер, моғайын. Диплом ҡатырғаһы көсөнә генә ышанып, бер нисә вуз тамамлап та, профессионалға әйләнмәгән замандаштарыбыҙ етерлек. Мәҫәлән, билдәле сәйәсмән Сергей Миронов ("Ғәҙел Рәсәй") биш вузды тамамлап, иҡтисадсы, инженер, юрист, философ һәм дәүләт идарасыһы дипломдары алған. Ысынлап та, кеҫәләге диплом күп ишектәрҙе аса, әммә профессионал итмәй. Вузды тамамлап та, тейешле эш урыны таба алмаған, йәки бөтөнләй икенсе эштә йөрөгәндәр менән донъя тулған. Шул уҡ ваҡытта тейешле белеме булмаһа ла юғары оҫталыҡҡа эйә булғандары ла осрап тора. Атаһының исемен дөрөҫ яҙа белмәгән бер танышым бала саҡтан техника менән булышып үҫте. Мәктәпте көс-хәлгә тамамлап, автосервис асып ебәрҙе. Хәҙер уға бөтә район кешеһе машинаһын ремонтлау өсөн сиратта тора, ул, һис шикһеҙ, үҙ эшенең "профессоры".

Йыш ҡына теге йәки был кешенең профессионал түгеллеген белә тороп та, уны эшкә алалар. Бер апайҙың хәҙерге ауыл, район хакимиәттәрендә ябай ғына документ әҙерләп тә бирә белмәгән булдыҡһыҙ белгестәр эшләүе тураһында әсенеп әйткәне хәтерҙә. Нишләп дилетанттар ғына түгел, ә тома наҙандар ошо "йылы урындарҙы" биләй һуң? Бер аҡыл эйәһенең "Наҙанлыҡ кешене берләштерә, профессионаллек - айыра", тип әйткәне дөрөҫкә сыға шикелле. Ысынлап та, компетентһыҙ етәксе өсөн наҙан белгестәр тотоу хәйерлерәктер. Улар үҙендең туған-тыумасаң булһа, тағы ла һәйбәтерәк. Бәлки, Гарднер законына ярашлы, эшләгәндәрҙең күпселеге дилетант булырға тейештер? Уларҙың тик 15 проценты ғына бөтә эште алып барһа, ошо етәлер? Арбаны профессионалдар тартһа, ҡалғандар уны этәрергә тейештер. Әммә был арбала ултырырға яратыусылар, хатта дилбегә менән сыбыртҡыға йәбешеүселәр күп шул. Бәлки, ошо күпселек арҡаһында беҙҙең арала көнсөллөк хөкөм итәлер ҙә? Һөнәрең булмаған, һөрән һалырға ҡалалыр. Эшлекһеҙҙе эшлекле ҡиәфәт тә ҡотҡармай шул.

Профессионаллекте үҫтереү маҡсатында ойошторолған төрлө ярыштарҙың иҫәбе-хисабы юҡ: быны иҫбатлау өсөн төрлө наградалар, призлар туплау хатта дәүләт кимәлендә рәсми хуплана башланы. Мәғариф етәкселәре уҡыусылар, уҡытыусыларҙы ошо бүләктәрҙән портфолио эшләргә мәжбүр итә. Берәй ойошмаға, кабинетҡа барып инһәң, стенала эленеп торған мисәтле маҡтау ҡағыҙҙарынан күҙҙәр ҡамаша. Был кешенең профессиональ кимәлен үҫтереү урынына, ошо "ҡағыҙҙар" йыйыу оҫталығын ғына арттырыуға булышлыҡ итәлер.

Был йәһәттән яңы үткән Олимпиада чемпиондары әйткән һүҙҙәрҙе килтерәм. Беҙҙең ике фигуристка Юлия Липницкая менән Аделина Сотникова, йәш булыуҙарына ҡарамаҫтан, профессионал менән "һәүәҫкәрҙәр" араһындағы айырманы бик асыҡ билдәләне. Команда составында алтын миҙал алған Юлия "алты йәштән алып алтын миҙал аласағын" белеп йөрөүе тураһында, ә шәхси ярышта Рәсәй тарихында беренсе тапҡыр алтын миҙалға лайыҡ булған Аделина иһә: "Мин көйәрмәндәр өсөн сығыш яһайым, кешегә оҡшарға тырышам",- тип әйтеп һалды. Ысынлап та, дилетанттар үҙ-ара ярышып, йыш ҡына ғәҙел булмаған ысулдар менән, төрлө титулдар яулап, йәмғиәт, үҙе алдында ошо "портфолио"һы менән генә "белгес" булып йөрөүҙе хуп күрә, ә профессионал үҙ эшендә тәбиғәт биргән һәләттәрен тулыһынса асырға ынтыла. Профессионал тип йөрөгән бәғзеләр тик башҡаларҙы ҡабатлау менән генә мәшғүл: күсермәнең төп нөсхәнән хөртөрәк икәне уның башына ла инеп сыҡмай. Юҡҡа ғына беҙ Сервантестың "Дон Кихот"ын, Пушкиндың "Евгений Онегин"ын ҡабат-ҡабат уҡымайбыҙ, Родендың, Рафаэлдың эштәре менә һоҡланмайбыҙ. Ғәбит Садиҡов та бушҡа ғына "Ҡалып шағирынан халыҡ шағиры сыҡмай", "Һәр яҙа белеүсе яҙыусы булмаҫ", тип әйтмәгән.

Профессионалдың Хоҙайҙан бирелгән һәләтен тик үҙ мәнфәғәтендә генә файҙаланыуы ла мөмкин. Был саҡта ул матди байлыҡ, исем, дәрәжә артынан ҡыуыу менән шөғөлләнә башлай, эшенең сифаты артҡы планға күсә бара. Был йәһәттән бөйөк Пабло Пикассоның яҙмышы фәһемле булып тора. Һәләтле рәссам бөтә тормошон дан һәм байлыҡ яулауға йүнәлтә. Ошонон арҡаһында ул туғандарына, яҡындарына ла бәғерһеҙ була: уға бөтә ғүмерен бағышлаған атаһын күрә алмай, улы Клодҡа ла "Үлгәнең яҡшы булыр ине", тип әйтә. Ҡатындарына, улар тапҡан балаларына ла вәхшәтле була (туҡмай, кәмһетә), хатта уларҙың икәүһенең үлеменә сәбәпсе була. Дуҫтарын, ҡәләмдәштәрен күрә алмай, хаинлыҡ күрһәтә. Популярлыҡ яулау өсөн ул бер нәмәнән дә тартынмай: коммунистар партияһы сафына ла инә, үҙен антифашист итеп тә күрһәтеп маташа. Хоҙай бирген һәләтте тик үҙ мәнфәғәте өсөн файҙаланыуы уны яҡшыға килтермәй. "Кеше бәхетенә көнләшкән үҙ бәхетен дә юғалтыр", тигәндәй, нисек кенә ҡыланмаһын, уның әҫәрҙәре ул уҙып китергә тырышҡан Матисс, Веласкес, Рембрандтыҡы менән тиңләшә алмай. Тормошоноң һуңғы көндәрендә үҙен ҡараған ҡатынға өйләнеп, деградация хәленә төшөп үлеп китә...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һәләтен кеше, үҙ халҡы мәнфәғәте өсөн асырға тырышҡан, ошо маҡсатҡа хеҙмәт иткән шәхестәрҙең һәр эше - төҙөгән өйө булһынмы, яҙған әҫәреме - халыҡ күңелендә мәңгегә һаҡланасаҡ. Бәхеткә күрә, беҙҙең замандаштарыбыҙ араһында ла бындай профессионалдар етерлек. Йәш быуын сифат тамғаһы һуғыу менән кәкре эш тураймаған һымаҡ, түштә миҙал, кеҫәлә диплом йөрөтөү менән оҫтаға әйләнмәйһең икәнен улар өлгөһөндә күреп белергә тейеш.**

**Илдар ҒӘБИТОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфө ошо көндәрҙә Рәсәйҙә старт алған "Үлемһеҙ полк" акцияһына ҡушылды. "Улар һәр ваҡыт еңеү сафында барырға тейеш" девизы аҫтында барған сара Еңеү көнөнә арналған. Телэгән өфөлө һуғышта алышҡан туғанының фотоһы менән, "Үлемһеҙ полк" колоннаһын формалаштырыуҙа ҡатнаша ала, ул 6 майҙа байрамса тантаналы атлау менән уҙасаҡ.

✓Башҡортостанда ғинуар-февралдә 9737 бала тыуған - 2013 йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда был 5,1 процентҡа күберәк. Тыуым үҫеше республиканың алты ҡалаһында: Өфөлә, Ағиҙелдә, Нефтекамала, Октябрьскийҙа, Салауатта һәм Стәрлетамаҡта, шулай уҡ 32 муниципаль районда билдәләнгән. Үлем кимәле 5,5 процентҡа кәмегән. Ике ай эсендә республикала 8892 кеше үлгән. Статистика мәғлүмәттәренә ярашлы, тотош Рәсәй Федерацияһында үлем кимәле тыуым иҫәбенән 5,5 процентҡа артыҡраҡ. Тәбиғи үҫеш илдең 83 субъектының 35-ндә күҙәтелгән.

✓Ҡ. Дәүләткилдиев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназия-интернаты тәрбиәләнеүселәре "Рәсәйҙең һәләтле балалары: буыуҙар һәм мөндар донъяһында" Бөтөн Рәсәй конкурс-фестивалендә бик яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәште. "Һүрәт, һынлы сәнғәт" номинацияһында Гран-прины унынсы синыф уҡыусыһы Алмаз Сакаев яуланы. Төрлө номинацияларҙа Айгиз Солтанов, Әлиә Бәзретдинова һәм Иҙел Талипов (I дәрәжә диплом), Анастасия Трошкина (III дәрәжә диплом) призерҙар булды. Гөлшат Ғәлиева, Дилә Рәхмәтуллина һәм Аделина Ғәзелшина "Яңы мөгжизәләр көткәндә" Бөтөн Рәсәй һынлы сәнғәт конкурсында I дәрәжә диплом менән бүләкләнде.

✓Республикала дәүләт һәм муниципаль хеҙмәткәрҙәр араһында Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Секретариаты Кубогы өсөн Спартакиада дауам итә. Унда Башҡортостан Президенты Хакимиәте, БР Дәүләт Йыйылышы Секретариаты, республика Хөкүмәт Аппараты, Өфө хакимиәте командалары ҡатнаша. Әлеге ваҡытта боҙ аҫтынан балыҡ тотоу, саңғы ярыштары, пневматик винтовканан атыу, йөҙөү һәм мини-футбол буйынса ярыштар уҙған. Биш спорт төрө йомғаҡтары буйынса Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Аппараты командаһы лидерлыҡ итә.

**"Башинформ"дан.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

## ЛИДЕРҘАР ИСӘБЕНДӘ

**"Росгосстрах" компанияһының стратегик тикшеренеүҙәр үҙәге яһаған һығымталарға ярашлы, Өфө халҡы, Ҡаҙан менән Төмәндән ҡала тормош кимәленән ҡәнәғәт булыусылар рейтингында өсөнсө урында килә.**

Йылдың беренсе кварталында Рәсәй иҡтисадындағы хәл-торошто тотороҡло тип иҫәпләргә мөмкин. Шул сәбәпле иртәгәһе көнгә ышаныусыларҙың өмөтө 63 проценттан 67 процентҡа тиклем күтәрелгән. Өфө, Ҡаҙан, Ижевск ҡалаһы халҡы үҙен ышаныслыраҡ тоя. Предприятиелар һәм ойошмалар хеҙмәткәрҙәре араһында иртәгәһе көнгә ышанысы артыусыларҙың өлөшө февраль кимәлендә һаҡланып, 78 процент тәшкил иткән һәм бында ла тәүге урындарҙы Өфө, Пермь, Ҡаҙан билә. Ындай тикшеренеүҙәр ай һайын уҙғарыла. Мартта унда 3 мең 424 респондент ҡатнашҡан.

## ЯҘҒЫ ТАШҠЫНҒА ӘҘЕРБЕҘ!

**Яҙ етеүен түҙемһеҙлек менән көтһәк тә, тәбиғәттең был миҙгеле үҙенә күрә хәүеф тә тыуҙыра. Сөнки, мәғлүм булыуынса, республикабыҙҙың ғына түгел, баш ҡала райондарында ла һыу аҫтында ҡалыу ихтимал булған территориялар бихисап.**

Өфө ҡала округы хакимиәтендә уҙған матбуғат конференцияһында "Коткарыу хеҙмәте 112" МБУ директоры Хәким Ниғмәтйәнов ҡала йәшәйешен тәьмин итеүсе объекттарҙың яҙғы ташҡынға әҙер булыуын белдерҙе. Күҙаллауҙар буйынса, быйыл Ағиҙелдә һыу кимәле - 670-770, Ҡариҙелдә - 710-810, Димдә 610-710 сантиметрға күтәрелеүе мөмкин. Ағиҙел йылғаһы зонаһында Ленин (барлығы 272 йорт һәм бакса участкаһы), Киров (182 йорт) райондарының ҡайһы бер йорттары һыу аҫтында ҡалыуы ихтимал. Дим районында 50 торлаҡ йорт һәм 287 баҡса участкаһына хәүеф янай. Барлығы ҡала буйынса 454 торлаҡ йорт ҙур һыу ҡорбаны булыуы мөмкин.

Яҙғы ташҡынды әҙемтәләрһеҙ үткәреү планына ярашлы, 20 марттан Өфө ҡала округының район комиссиялары эш башлаған да инде. Ҡалала барлығы ташҡынға ҡаршы 19 штаб, 6 мең кешегә иҫәпләнгән 53 халыҡты ваҡытлыса урынлаштырыу пункты әҙерләнгән. Барлығы 2026 кеше һәм 433 берәмек техника әҙерлек һыҙығында тора. Кузнецовск Затоны биҫтәһендә 420 метрлыҡ дамба нығытылған. Һыу кинәт күтәрелгән осраҡта халыҡ махсус системалар, шул иҫәптән сирена, полиция хеҙмәткәрҙәренең өй беренсә йөрөүе аша еткереләсәк. Ашығыс эшмәкәрлек осрағына ҡаланың "Коткарыу хеҙмәте 112" даими әҙерлектә тора. Унын составында 53 кеше, 12 берәмек техника, 22 йөҙөү сараһы, ПНС - 110 янғын һүндереү насос станцияһы, юғары һөҙөмтәлелекле 2 һыу һурҙырыу помпаһы бар. Ташҡындың иң хәүефле мәле апрель һуңында - май башында көтөлә.

## ТАҘАЛЫҠ АЙЛЫҒЫ

**7 апрелдән Өфө ҡалаһы территорияһын санитар таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса айлыҡ иғлан ителде.**

Унын сиктәрендә инде йолаға әүерелгән "санитар йома"лар һәм дүрт (12 апрелдә һәм 24 майҙа - дөйөм республика, 19 апрелдә һәм 17 майҙа - дөйөм ҡала) өмә ойоштороласаҡ. Айлыҡ барышында яр зоналары, урмандар, һыу баҫҡан территориялар айырым иғтибар үҙәгендә буласаҡ. Шулай уҡ юлдарҙы ремонтлау һәм тейешле сифатлы асфальт һалыу буйынса ла эшмәкәрлек әүҙемләшәсәк. Ағастар һәм ҡыуаҡлыҡтар ултыртыласаҡ, рәхсәтһеҙ ташланған ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары урындары таҙартыласаҡ. Подрядсылар төҙөлөш майҙандарын һәм унын тирә-яғындағы территорияларҙы тәртипкә килтерәсәк. Ниндәй милек тәрәндә булыуына ҡарамаҫтан, барлыҡ предприятиелар, ойошмалар һәм учреждениелар етәкселәре үҙҙәренең ҡарамағындағы биналарҙың фасадын, территорияларын таҙартырға һәм төҙөкләндерергә бурыслы.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ЮҒАРЫ УҠЫУ ЙОРТОНДА...

## башҡорт телен дә өйрәнәләр



**М. А. Шолохов исемендәге Мәскәү дәүләт гуманитар университетының Өфөләге филиалында БР Мәғариф министрлығы менән берлектә мәктәп уҡыусылары өсөн туған телдәр буйынса VIII республика асыҡ олимпиадаһы үткәрелде. Республиканың төрлө төбәктәренән килгән юғары класс уҡыусылары башҡорт, рус һәм татар телдәре, Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте предметтары буйынса көс һынашты.**

Баш ҡаланың төрлө мәктәптәренән, республикабыҙҙың төньяҡ-көнбайыш райондарынан ике йөҙҙән ашыу уҡыусы тәғәйенләнгән ваҡытта юғары уҡыу йортонон тантана залына йыйылды. Мәктәп уҡыусылары олимпиада эштәрен яҙған арала уҡытыусылар яҙыусылар менән аралашты. Артабан, жюри ағзалары үҙ эшен башҡарғансы, уҡыусылар "Милли кейемдәр фестивале" конкурсы сиктәрендә милли кейемдәрҙә сығыш яһаны, йырланы, бейене. Сәхнәгә сығыусы балаларҙың шул тиклем оло ғорурлыҡ менән үҙ милләтенең ғөрөф-ғәҙәттәре, ата-бабаларының үткәне тураһында һөйләп тороуы һоҡландырҙы. Әммә барлыҡ тамашасыны Шишмә ауылының 1-се мәктәп уҡыусыһы Анастасия Васюктың "Кышкы романс" йырын башҡортса йырлауы хайран иткәндер. Рус ҡыҙының олимпиадала башҡорт теле буйынса ярышыуын, башҡорт милли кейеме кейеп, сәхнәгә сығыуын милләтебеҙгә ҡарата ихтирамдың бер сағылышы, тип ҡабул итте йыйылған халыҡ. Ниһәйәт, ашығып көткән мәл - олимпиада еңеүселәрен тәбрикләү тантанаһы ла килеп етте. Баһалама комиссияһы ағзалары йәмғеһе 157 уҡыусының эшен тикшерҙе. Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүсе уҡыусылар араһында Шишмә районы Шингәккүл ауылы мәктәбе уҡыусыһы Гүзәл Ҡунаҡбаева беренсе урынға сыҡты.

Олимпиада һөҙөмтәләре билдәләнеп, конкурсанттар таралышып бөткәс, М. А. Шолохов исемендәге Мәскәү дәүләт гуманитар университетының Өфө филиалы етәксеһе Василий Бабенко менән ҡыҫҡа ғына әңгәмә ҡорҙоҡ.

- Башҡорт милләтенең тарихы туған ере, ата-бабалары төйәге һаналған Башҡортостан Республикаһында йәшәгәс, үҙебеҙҙең студенттарыбыҙҙа башҡорт халҡына, унын теленә, мәҙәниәтенә ҡарата хөрмәт тә тәрбиәләргә бурыслыбыҙ, - тип һөйләп китте Василий Яковлевич.- Шуға ла бына ун биш йыл дауамында университетыбыҙҙың һәр факультетында башҡорт теле дәүләт теле һәм туған тел булараҡ өйрәнелә. Әммә уҡытыу эшен кешенең этник сығышына бәйләмәйбеҙ. Шуға күрә, рус милләтле студент башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнергә теләк белдергән осраҡтар ҙа теркәлгәне бар. Белем алыусы йәштәрҙең береһе лә башҡорт телен уҡытыуға ҡаршы сыҡҡаны юҡ. Студенттар менән үҙ эштәренә мөкиббән бирелгән, юғары квалификациялы белгестәр, ижади хеҙмәткәрҙәр эшләй. Республика педагоггары араһында тәүгеләрҙән булып юғары уҡыу йортонда мәҙәниәт менән бергә башҡорт телен туған тел һәм дәүләт теле булараҡ уҡытыу әсбабын төҙөүсе Зилә Рәйемғужина, беҙҙең университет базаһында бер-нисә башҡорт теле һүҙлеге һәм уҡыу әсбаптары әҙерләгән Зөһрә Әбүбәкирова эшләне. Бөгөн студенттарға билдәле ғалим, яҡшы педагог, мәктәптә башҡорт телен уҡытыу өсөн төҙөлгән китаптар авторы Юлай Псәнчин белем бирә. Телдәрҙе өйрәнеү аудитория сиктәрендә генә барырға тейеш түгел. Шуға студенттар араһында бөтөн милли телдәрҙе популярлаштырыу, халыҡтар мәҙәниәте менән яҡындан таныштырыу ниәтендә төрлө саралар үткәрәбеҙ. Мәктәп уҡыусылары һәм университет араһында бәйләнеш булдырыу, милләт-ара дуҫлыҡ ептәрен нығытыуҙа был ярыштарҙың әһәмиәте бик ҙур, тип иҫәпләйем...

Эйе, М. А. Шолохов исемендәге Мәскәү дәүләт гуманитар университетының Өфөләге филиалында башҡорт теле дәрестәрен уҡытыу яйға һалынған икән, республикабыҙҙың бөтөн вуздарында унын бөсе төшөүе студенттарҙың өйрәнергә теләмәүенә генә ҡайтып ҡалмайҙыр. Бында ла уйланырға урын бар.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

## УҠЫТЫУСЫЛАР ЯРЫШТЫ

**Баш ҡалала "Йыл уҡытыусыһы-2014" Рәсәй конкурсының республика этабы тамамланды. Быйыл Башҡортостан Республикаһы намыҫын яҡлау бурысы Ишембай ҡалаһының 12-се лицейы биология уҡытыусыһы Светлана Ермакова иңенә һалынды.**

Республиканың бөтә төбәктәренән йәмғеһе 117 уҡытыусы һөнәри оҫталыҡтарын һынаны. Улар араһынан 35 педагог конкурстың икенсе этабына үтеү хоҡуғын яулай алды. Асыҡ дәрестәр, класс сәғәттәре, оҫталыҡ кластары, түңәрәк ҡорҙар һәм педагогик бәхәстәр йомғаҡтары буйынса конкурстың лауреаттары булыу хоҡуғын Өфө ҡалаһының 159-сы урта белем биреү мәктәбе химия уҡытыусыһы Эльза Лотфрахманова, Стәрлетамаҡ ҡалаһының 31-се мәктәбе математика уҡытыусыһы Елена Карпова, Туймазы районы Собханғол ауылы урта мәктәбе математика һәм физика уҡытыусыһы Елена Шанина, Стәрлетамаҡ ҡалаһының 34-се мәктәбе башланғыс синыф уҡытыусыһы Гүзәл Семенникова алды. Төбәктең иң яҡшы уҡытыусыһы тип Ишембай ҡалаһының 12-се лицейы биология уҡытыусыһы Светлана Ермакова билдәләнде. Рәсәй кимәлендә Башҡортостан уҡытыусылары исеменән сығыш яһау өсөн 24-се тапкыр уҙғарылған ярышта ул өсөнсө тапҡырға ҡатнашҡан. Иңендә 19 йыллыҡ уҡытыу стажы булған мөғәллимә оҙаҡламай республикабыҙ намыҫын юғары кимәлдә яҡларға йыйына.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓7 апрелдә баш ҡалала территорияларҙы таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса айлыҡ старт алды. Ул 25 майға тиклем дауам итәсәк, һәр йылдағыса, "санитар йомалар" ойоштороласаҡ һәм ике дөйөм республика (12 апрелдә һәм 24 майҙа), ике дөйөм ҡала (19 апрелдә һәм 17 майҙа) өмәһе уҙғарыласаҡ. Айлыҡ үткәреү осоронда Черкассы ҡасабаһында урынлашҡан ҡаланың ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары полигонында ла район хакимиәттәренең билдәне менән сүп-сар бушлай ҡабул ителәсәк.

✓БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы хәбәр итеүенсә, 1 апрелгә ҡарата республикала рәсми рәүештә 24,4 меңдән ашыу эшһеҙ иҫәпләнә. Республиканың вакансиялар банкында был ваҡытҡа 39,5 мең буш эш урыны тураһында мәғлүмәт бар. Ошо йылдың ғинуарында төбәктә уртаса эш хаҡы 21788 һум тәшкил итте.

✓Башҡорт дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығында Алтай крайынан бер йыл элек килтерелгән бер төркөм маралды ишкә сығарырға әҙерләнәләр. Хайуандарҙы Һарғайа ҡурсаулығының үҙәк усадьбаһында махсус йыһазландырылған майҙансыкта аҫрайҙар. Белгестәр фекеренсә, хайуандар үҙ аллы йәшәргә әҙер. Маралдар ҙурайған, ата маралдарҙың мөгөҙө үҫкән, ә инәләре оҙаҡламай тоҡом бирә алырлыҡ. Ҡурсаулыҡтың маҡсаты - Көньяҡ Уралда эре Себер боландарының иҫәбен арттырыу.

✓2013 йылдың дүртенсе кварталы өсөн Рәсәйҙә кеше башына йәшәү минимумы 7326 һум күләмендә раҫланған. Өсөнсө кварталда был күрһәткес 7429 һум кимәлендә билдәләнгәйне. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, республикала 2013 йылдың дүртенсе кварталы өсөн йәшәү минимумы 6446 һум тәшкил итте.

✓Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа, шул иҫәптән фермер хужалыҡтарына ярҙам итеүгә Башҡортостан 2014 йылда федераль бюджеттан 410 миллион һум аласаҡ. "Иҡтисади үҫеш һәм инновацион иҡтисад" дәүләт программаһының "Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡты үҫтереү" өҫтәмә программаһы сиктәрендә Рәсәй Федерацияһы субъекттарына субсидиялар бүлеү тураһындағы бойороҡ Рәсәй Хөкүмәтенең сайтында баҫылған.

✓Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы 5 апрелдә кәрәҙле телефондан табипҡа яҙылыу өсөн берҙәм номерҙы үҙгәртте. Ведомствола аңлатыуҙарынса, кәрәҙле телефондарҙан табипҡа күренеүгә яҙылыу өсөн 09-383 берҙәм һанын йыйырға кәрәк. Был номер бөтә операторҙар өсөн эшләйәсәк.

АФАРИН!

**Батырҙарға халҡыбыҙ борон-борондан ҙур хөрмәт күрһәткән. Уларға йырҙар, ҡобайырҙар, риүәйәт-легендалар арнаған. Боронғо осорҙа халҡыбыҙ батыр тип, ҡаһарман, башҡаларҙан айырылып торған физик көскә эйә кешеләрҙе ололаһа, ырыу-ҡәбиләләр ойошоу менән - ырыу башлыҡтарын, аҙағыраҡ яуҙа таҫыллыҡ күрһәткән яугирҙарҙы ла ошо исем-ат менән данлай башлаған. "Батыр" һүҙенең бөгөнгө мәғәнәһе ана шул ике ҡараштың үҙ эсенә ала ла инде.**

# ЮРМАТЫ БАТЫРЫ...

## көрәштә асыҡланды

Һуңғы йылдарҙа был исем спортта ҙур еңеүҙәргә өлгәшкән спортсыларыбыҙға ҡарата ла ҡулланыла башланы. Мәҫәлән, Рәсәйҙең иң көслө кешеһе Эльбрус Ниғмәтуллинды, Американы дер һелкеткән бер туған боксерҙар - донъяның иң көслө 15 боксеры исемлегенә ингән Хәбир менән Сабир Сөләймәновтарҙы, биатлон һәм саңғы ярыштары буйынса 4 тапҡыр паралимпия уйындары чемпионы Ирек Зариповты "Заманабыҙҙың башҡорт батырҙары" тип оло ғорурлыҡ менән атайбыҙ. Кемдер "Батырҙар тарихта ғына булған бит", тип, батыр исемен әрһеҙләүҙә ғәйепләр. Улайһа, батырҙарҙы телдән төшөрмәү ни өсөн кәрәк, тип, ҡаршы һорау ҡуяйыҡ. Был һорауға яуап биреү өсөн "Булыр илдең балаһы бер-береһенә батыр, тиер" тигән әйтемебеҙҙе иҫкә төшөрөү ҙә етә. Беҙ көслө, алдынғы ҡарашлы, милләтен данлаған ир-егеттәребеҙҙе бөгөн дә батыр тип күтәрмәләргә тейешбеҙ.

Әйткәндәй, был фекерҙе раҫлап, уны күтәреп алыусылар арта хәҙер. Республикабыҙ райондарында йыш үткәрелә башлаған милли көрәш турнирҙарын ғына алайыҡ. Бында ла ошо маҡсат ҡуйыла бит: районды, ырыуҙың, ауылдың батырҙарын асыҡларға! Әле күптән түгел Ишембай ҡалаһының Спорт һарайында үткән зона-ара турнирына ла юрматы ырыуы батырын асыҡлау маҡсатында йыйылдылар. Ишембай районы һәм ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының (рәйесе Әлфис Фәйзуллин) инициативаһын Башҡортостан Республикаһы Билбау көрәше федерацияһы, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге, "Ғәлиә" химик таҙартыу предприятиеһы, Ишембай нефть колледжы, "Киске Өфө" гәзите редакцияһы һәм бихисап шәхси эшҡыуарҙар күтәреп алды һәм ошо төбәктең бер нисә районының йәш батырҙарына көс һынашыу мөмкинлеге тыуҙырылды. Шулай итеп, майҙан уртаһына Салауат, Стәрлетамаҡ, Мәләүез, Ишембай ҡалаларынан, Мәләүез, Стәрлебаш, Ишембай райондарынан 1996-1999 йылдарҙа тыуған алтмыштан ашыу йәш батыр, йәш буйынса ике төркөмгә бүленеп, бил һынашырға сыҡты.

-Милли көрәш буйынса ярыштар район кимәлендә йыш үтә, ә бер нисә районды бергә туплаған бындай киң масштабтағы бәйге үткәрелгәне юҡ ине, - тине Маҡар балалар һәм үҫмерҙәр спорт мәктәбе тренеры, әлеге ярыштың баш судьяһы Олег Яҡупов. - Етмәһә, ярыштың форматы ла бик уңышлы уйланылған - еңеүсегә "Батыр" исеме бирeләсәк, тигән хәбәрҙе ишетеп ҡалдылар ҙа, егеттәр ярышҡа бик әүҙем әҙерләнде. Малайҙарҙы ысын ир-егет итеп тәрбиәләүҙә спорттың, әлеге осраҡта милли көрәштең, ошондай ярыштарҙың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ ҙур. Сөнки, бында рух, бында сәм, бында халыҡсанлыҡ тантана итә...

Шулай итеп, район мәҙәниәт идаралыгы әҙерләгән матур тамашаларҙан һуң ҡурай моңо оҙатыуында тәүге көрәшселәр бил быуып, алыша ла башланы. Биш сәғәткә яҡын барған алыш һөҙөмтәһе буйынса командалар беренселегендә тәүге урынды һәм кубокты - ишембайҙар, икенсене - мәләүездәр, өсөнсө урынды стәрлебаштар яуланы. Шәхси беренселектә ике төркөмдә лә төрлө ауырлыҡ категориялары буйынса еңеүселәр билдәләнде. Еңеүселәргә кубок, затлы бүләктәр, маҡтау ҡағыҙҙары тапшырылды. "Юрматы батыры", йәғни йыйындың абсолют чемпионы исемен Ишембай нефть колледжы студенты Айнур Собханғолов яуланы. Егеткә бүләк итеп затлы келәм тапшырылды, юрматы ырыуының аҡһаҡалы, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе Риф Иҫәнов башҡорт милли кейеме - елән менән бүрек кейҙерҙе.

"Юрматы батыры" милли көрәш турниры көрәшселәрҙе лә, ярышты ойоштороусыларҙы ла дәртләндерҙе, йәрәктәргә сәм өҫтәне. Ойоштороусыларҙың береһе Ишембай башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Әлфис Фәйзуллин: "Маҡсатыбыҙ - йәштәребеҙҙә "Батыр" исеменә ынтылып, бәйгеләрҙә һынау тотоуға, көс һынашыуға ҡыҙыҡһыныу уятыу ине. Икенсе йылға Ишембай ҡалаһының 75 йыллығына был сараны тағы ла ҙурыраҡ итеп үткәрергә тигән ниәт бар. Был сара ниәтебеҙҙең хаҡ булыуына ла инандырҙы бына..." - тине.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**



АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМӘҒӘТ!

# БОРАЙҘАР...

## хәмергә ҡаршы күтәрелде

**Борай ауылы мәсете янында йөҙләгән кеше урындағы алкомаркет асылыуға ҡаршы санкцияланған митинг ойошторҙо. Халыҡ шулай уҡ район етәкселәрен Рәсәй Хөкүмәтенең алкоголгә ҡаршы концепцияһы талаптарын үтәргә саҡырҙы.**

Борайлыларҙың алкоголь һатыусы сираттағы сауҙа нөктәһе асылыуға ҡаршы дәррәү күтәрелеүе көтөлмәгән хәл түгел. Район Башҡортостанда демографик хәл иң ҡыҫкен торған төбәктәрҙән һанала. Статистика мәғлүмәттәре буйынса, Борай районында тыуым буйынса иң түбән күрһәткес (1 мең кешегә 10,6 кеше) һаҡлана, үлеүселәр һаны буйынса ла район "алдынғылар " рәтендә (1 мең кешегә 19 кеше). Миграцияны ла иҫәпкә алғанда, бер йыл эсендә халыҡ яҡынса 500 кешегә кәмегән. Былтыр Борай районынан Илдус Фәйрушин исемле автор "Киске Өфө"лә: "Тағы биш, ун, егерме, утыҙ йылдан нимә буласаҡ? Егерме биш меңлек район йыл һайын 500 кешеһен юғалта! Тағы бер-ике быуындан был ерҙәр буш тороп ҡаласаҡ", - тип әсенеп яҙғайны. Был проблемаларҙың нигеҙендә эскелек, дөрөҫөрәге, алкоголде иҡтисади "мәнфәғәттәрҙән" сығып аҡларға тырышыу сәйәсәте ятыуы көн кеүек асыҡ.

Был мәсьәләләрҙе аңлаған, ауыл, халыҡ, йәш быуын яҙмышы өсөн битараф ҡала алмаған кешеләр алкомаркет асылыуға ҡаршы сыҡты ла инде. "Яҡташтарыбыҙ өсөн изге урын янында әшәкелектәр эшләнеүенә битараф ҡала алмайбыҙ", - тине 2-се Борай мәсетенең имам-хатибы Илдар Шәрәфиев. Митингтан һуң район хакимиәте башлығы урынбаҫарҙары һәм район Советы депутаты менән һөйләшеү булды. Халыҡ үҙенең талаптарын власть кешеләренә еткерергә тырышты, улар ҡулдарынан килгәнсә ярҙам итергә вәғәҙә бирҙе. Шулай ҙа фекер алышыуҙар ваҡытында бәхәстәр ҙә ҡупманы түгел. "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт хәрәкәте рәйестәше Ренат Зәйнуллин: "Фекер алышыуҙар ваҡытында бер депутат, әгәр сауҙа нөктәләрендә алкоголь һатыуҙы сикләһәк, суррогат иҫерткестәр ҡулланыу артасаҡ, тигән стереотип ҡараш менән аҡланды. Һуңынан асыҡланыуынса, был депутат Борай районында иң ҙур алкоголь һатыусыларҙың береһе икән һәм алкоголь бизнесы мәнфәғәттәрен яҡлаусы булып сыҡты", - тип белдерҙе.

Закон буйынса, дини йорттар (мәсет, сиркәү) эргәһендә алкоголь һатыу тыйылған учреждениелар исемлегенә инмәй. Ләкин урындағы үҙидаралыҡ тарафынан был сикләүҙәрҙе тормошҡа ашырырға мөмкин. Борайлылар ошо йүнәлештә бер аҙым эшләне лә инде. Чиновниктар мәсет янындағы алкомаркет икенсе урынға күсереләсәге хаҡында белдерҙе. Бынан тыш, йәмәғәтселек баҫымы аҫтында Борай районында мәғариф, мәҙәниәт һәм башҡа ойошмаларға 110 метрҙан да (закон буйынса ҡаралған иң алыҫ ара) яҡында алкоголь һатыуҙы тыйған ҡағыҙҙа индереләсәк. Был ҡағыҙҙа район Советының киләһе ултырышында ҡараласаҡ һәм тейешле ҡарар ҡабул ителәсәк. Был миҫал башҡа ауылдарға, райондарға ла өлгө булыр, тип ышана борайлылар.

**Азамат САЛАУАТОВ.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ашҡаҙан полиптары

❖ 1 стакан кипкән йәки яңы өҙөлгән эт дегәнәген (чистотел) марляға һалып бәйләргә һәм 3 л эремсек һыуына төшөрөргә, ул эскә йөҙөп сыҡмаһын өсөн, ауырлыҡ һалырға. 1 балғалаҡ ҡаймаҡ өҫтәргә. Банканы бер нисә ҡат марля менән бәйләп, ике аҙнаға йылы урынға ҡуйырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда яртышар стакан эсергә. Дауалау курсы - 1-2 аҙна.

❖ Ашҡаҙан эшмәкәрлеге боҙолһа:

Һуҡыр кесерткәндең 2 ботағына 200 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 20 минут төнәтергә, бар дозаны бер юлы эсергә. 2 стакан дауа колиттан ҡотҡарасаҡ.

❖ Ҡайнар һыуҙа төнәтелгән анар ҡабығы ашҡаҙанды дауалау өсөн ҡулланыла. 1 ҡалаҡ ҡабыҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, төҫө сыҡҡансы тоторға һәм эсергә.

❖ Үрмә ҡаҙ үләне (калган) менән ҡырҡколас (кровохлебка) - бактерицид көскә эйә. 1-әр өлөш тамырҙы ваҡлап, 2 ҡалаҡ тамырға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Шәкәр өҫтәп, һәр сәғәт һайын яртышар стакан эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ муйыл емешенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 5 минут ҡайнатырға. Көнөнә 2-3 тапҡыр ашарҙан алда яртышар стакан эсергә.

❖ 1 өлөш - кәзә талы, 1 өлөш - аҡ сәскә. 1 стакан ҡайнар һыуҙа 15 минут төнәткәс, ике өлөшкә бүлеп, шәкәр һалып эсергә.

❖ Метеоризм ваҡытында түбәндәге дауа ярҙам итә: әнис орлоғо - 50 г, тмин орлоғо - 30 г, аҡ сәскә - 50 г, мәтрүшкә - 30 г. 1 ҡалаҡ ҡатнашмаға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Көнөнә 2 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

❖ 5 ҡалаҡ йәш имән ҡайырыһына 1 л ҡайнар һыу ҡойорға, көн дауамында эсергә.

### Тәндең сейләнеп тишелеүе

❖ Яраға крахмал һибергә.

❖ Уртаса ҙурлыҡтағы 2 һуғанды турап, уға 2 ҡалаҡ үҫемлек майы һалып, талғын утта 20 минут быҡтырырға. Һуған алтынһыу төҫкә инергә тейеш. Һуғанды һөҙөп алғас, табалағы майҙа сиркәү шәмен (1/4 өлөшө) иретегеҙ. Ошо майҙы банкаға һалып алығыҙ һәм даими рәүештә яраға һөртөп тороғоҙ.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# КӘКҮК СӘЙЕ

**Ҡарға бутҡаһы байрамы кеүек үк, был байрам да ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар ҡатнашлығында үткән. Тәүгеһе яҙғы йола иҫәпләнһә, Кәкүк сәйе иһә йәйге байрам һанала. Ул йәйләүгә күскәс, йәки яҙғы сәсеү эштәре тамамланғас башҡарыла. Был кәкүктең оҙаҡ итеп ҡысҡыра башлауы мәленә тура килгән.**

Кәкүк сәйе байрамы йылға ярында, яланда йәки тау түбәләсендә үткәрелә. Унда башлыса оло йәштәге ҡатын-ҡыҙ, балалар ҡатнаша. Улар байрамса кейенә, баштарына аҡ йәки төрлө төҫтәге яулыҡтар ябына. Урта өлөштәге райондарҙа, тау-урман зонаһында йәшәүселәр тәбиғәт ҡосағында бутҡа бешергән, шулай ҙа күпселек осраҡтарҙа байрамда сәй йәки ҡымыҙ эсеү менән сикләнгәндәр. Ҡайһы бер мәғлүмәттәр буйынса, Учалы төбәгендә был йола йома көнө үткәрелгәнгә күрә, йома сәйе тип тә аталған. Кәкүк сәйендә яҡшы уңыш теләп, доға ҡылғандар. Кәкүк саҡырыуына төрлөсә юрауҙар ҡорғандар. Әгәр ҙә кемдеңдер теләгенә яуап итеп кәкүк сағыу һәм оҙаҡ итеп ҡысҡырһа, теләк үтәлә, тип шатланғандар.

Табындан ҡалған һыйҙы кәкүккә ҡалдырғандар. "Бына һиңә, кәкүк, өлөшөңдө бирәбеҙ", - тигән һамаҡтар менән үләнгә, ағас төбөндәге таштарға һалып сыҡҡандар. Ошондай уҡ ҡош һыйлау йолаһы Ҡарға бутҡаһы байрамында башҡарылған. "Бутҡа - ҡарға ризығы", тигән һүҙҙәр менән бутҡаны һәм һөт аҙыҡтарын ағас ботаҡтарына, таш, түңгәк һәм ағас төптәренә һалғандар. Ҡайһы бер көньяҡ райондарҙа: "Игендәр уңһын, үҫһен ашлыҡ", тигән һүҙҙәр менән ҡарғаларға мөрәжәғәт итеп, һәйбәт уңыш һорағандар. Кәкүк сәйендә иһә кәкүк ҡунып саҡырған ағас төбөнә һөт йәки ҡатыҡ ҡойоу йолаһы күҙәтелгән, быны менән улар был ҡошто мәрхәмәтләндерергә теләгән.

Ҡарға бутҡаһы байрамында ҡыҙыҡлы бейеү ҙә башҡарылған. Унда балалар шулай тип һамаҡлаған:

*Ҡаҙандарҙа бутҡа бешә,*
*Бытыр-бытыр итәлер.*
*Ағас башында ҡарғалар*
*Ҡаррыҡ-ҡорроҡ итәләр.*

Байрамда күҙҙе бәйләп, бер-береһенә бутҡа ашатыу, ҡатыҡ менән тултырылған һауыттан ҡулды ҡулланмай ғына тимер аҡса алыу, сей йомортҡа һалынған ҡалаҡты ауыҙға ҡыҫтырып йүгереү һәм башҡа төрлө ҡыҙыҡлы уйындар үткәрелгән.

Йыл һайын үткәрелә килгән ҡарға туйы ла, кәкүк сәйе лә бер-береһенә бик оҡшаш байрамдар. Унда ырыуға имен, тыныс тормош, игендәрҙең уңыуын, малдың артыуын теләп, мотлаҡ рәүештә мул итеп бутҡа бешерелгән. Тәбиғәттең, мәрхүм атай-олатайҙарҙың рухтары ризалығы өсөн ҡоштарҙы бутҡа менән һыйлағандар. Бындай байрамдар башҡа төрки телле халыҡтарҙа ла күҙәтелә. Күп халыҡтарҙа ҡарға изге ҡош иҫәпләнә, уларҙың риүәйәт-легендаларында ҡарға балаларҙың һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың һаҡсыһы булараҡ сығыш яһай.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

УҠЫТЫУСЫ ҺҮҘЕ

**Мәҙәниәт йылында "Нимә ул мәҙәнилек?" тигән һорауға яуап эҙләү тәбиғи күренеш булыр. Беҙ, уҡытыусылар, уға үҙебеҙсәрәк яуап бирәбеҙ. Мәҙәнилек - ул иң беренсе сиратта әҙәп, йәғни кешенең шәхси мәҙәнилеге, йәмәғәт урындарында үҙен тота, аралаша, һөйләшә белеүе. Уҡытыусы-тәрбиәселәр мәктәптә дәрес биреүҙән тыш, ошо мәҙәнилеккә өлгәшергә тырыша. Икенсенән, уҡыусының мәҙәнилеге, уҡыусының ғына түгел, һәр кешенең мәҙәнилеге - ул туған телен, туған халҡының йолаларын, традицияһын, тарихын белеүе. "Үҙ халҡыңдың телен, тарихын, традицияларын белмәү - кеше ниндәй генә юғары ғилемгә эйә булһа ла, наҙанлыҡ, тигән фекерҙәмен", - ти "Тормош һабаҡтары" программаһы һәм дәреслектәре авторҙарының береһе яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева. Ошо фекерҙән сығып та булдырылғандыр инде был предмет.**

# ХАЛЫҠ АҠЫЛЫНА ТАЯНҒАНДЫҢ...

## эске көсө ныҡ була



Миңә оҙаҡ йылдар мәктәптә "Тормош һабаҡтары" ("Башҡорт мәҙәниәте") уҡытыусыһы булып, йөҙөп йөрөп, кинәнеп эшләү бәхете тейҙе. Уҡыусылар был предметты иң яратҡан дәрестәренән һанай ине. Сөнки мин уларға иң элек: "Һеҙгә сит илдәргә сығырға тура килһә, ят кешеләр менән аралашһағыҙ, Пифагор теоремаһы йәки Менделеев таблицаһы түгел, ә үҙ халҡығыҙҙың шәхестәре, сәнғәт әһелдәре, яҙыусылары, Башҡортостандың тарихи һәм тәбиғәт ҡомартҡылары тураһында белем кәрәк буласаҡ. Кеше үҙ халҡы тураһында ни тиклем күберәк белә, шул хәтлем белемле, аҡыллы күренә һәм ихтирамға лайыҡ була. Үҙ мәҙәниәтеңде белеү ҡайҙа ғына, кем генә булып эшләһәң дә, һәр ваҡыт кәрәк", - тип аңлатыуҙан башлай инем дәрестәремде. Халҡыбыҙҙың мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, ғөмүмән, милли идея хаҡында һөйләшкәндә балаларыбыҙ йөҙөндәге ихласлыҡ, ниндәйҙер сәм-ғәйрәт саҡҡылары баҙлап китеүе, ә инде яуап биргән саҡтағы фекер тәрәнлеге мине ҡанатландырып ебәрә ине. Мәктәпте тамамлап сыҡҡан уҡыусыларымдың мәҙәни кимәле юғары булыуы өсөн рәхмәт әйтеүҙәре, хатта Бөтөн Союз кимәлендәге матбуғат биттәрендә сығыш яһауҙары, үҙҙәрен генә түгел, халҡыбыҙ мәнфәғәтенә ишаралап, милләтебеҙҙең киләсәген хәстәрләүҙәре һөйөндөрә.

Хәҙер күп кенә район мәктәптәрендә "Тормош һабаҡтары" предметын уҡытмайҙар, тип үкенеүҙәрен йыш ишетергә тура килә. Ҡайһы бер район мәктәптәрендә башҡорт теле менән әҙәбиәтен дә дәүләт теле булараҡ ҡына уҡыталар, бындай мәктәптәрҙә "Культура Башкортостана" предметы индерелгән. Ә бит күп кенә башҡорт булмаған мәктәп уҡытыусылары, үҙҙәре һорап, "Тормош һабаҡтары"н (10-сы класс дәреслеген) руссаға тәржемә иттереп уҡыталар, сөнки был предмет уҡыусыға "Культура Башкортостана" кеүек, мәғлүмәт биреп кенә ҡалмай, шул мәғлүмәттәр нигеҙендә баланы рухи тәрбиәләү маҡсатын да тормошҡа ашыра. Уҡыусы үҙ халҡының традициялары, йолалары, ижады, тарихы, халыҡ педагогикаһы нигеҙендә ала рухи тәрбиәне. Ә ундай тәрбиә алған кеше бик төплө мәҙәни кеше була.

Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан йыл һайын республика кимәлендә "Тормош һабаҡтары", "Культура Башкортостана" предметтары буйынса олимпиадалар үткәрелә. Миңә, оҙаҡ йылдар ошо предметты алып барған, хәҙерге көндә хаҡлы ялдағы ветеран уҡытыусыға, ул олимпиадаларҙа жюри ағзаһы булырға тәҡдим итәләр. Быйыл да Башҡортостан мәҙәниәте һәм тарихы менән ҡыҙыҡһынған, уны яратып өйрәнгән балалар Өфөлә йыйылып, үҙ-ара көс һынашты. Олимпиадаға балалар арыу ғына әҙерлек менән килгәйне. Һәр уҡыусы тулы һәм йөкмәткеле итеп үҙ белемен күрһәтергә тырышты. Әлбиттә, былар - алһыҙ-ялһыҙ, ихлас эшләгән уҡытыусыларҙың тырыш хеҙмәт емеше. Шулай ҙа ҡатнашыусылар араһында белем яғынан самалыраҡ булғандарын да осратырға тура килде. Мәҫәлән (райондарын атамай ғына яҙам), Һәҙиә Дәүләтшинаның, Арыҫлан Мөбәрәковтың кем икәнен белмәгән балалар булды йәки Рудольф Нуреевты, президентыбыҙ булған, тиеүселәр ҙә табылды. Һуңғы йылдарҙа предметтың илке-һалҡы ғына уҡытылыуында, йә дәрестәр теҙмәһендә яҙылһа ла, Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерләнеү һылтауы менән, "Тормош һабаҡтары"н уҡытыуға иғтибарҙы кәметеүҙә инде бының сәбәбе. Бындай мәктәптәрҙә, күрәһең, йәш быуынды халыҡ педагогикаһы нигеҙендә белем һәм тәрбиә серҙәренә төшөндөрөүҙең әһәмиәтен аңлап етмәйҙәрҙер. Йәмғиәт, дәүләт үҙ иленең һәр кешеһе хаҡында хәстәрлек күрергә тейеш икәнлегенә яҡшы төшөнәбеҙ, сөнки үҙенә ҡарата иғтибар кәмеһә, кеше йәмғиәттең, илдең яҙмышы менән дә ҡыҙыҡһынмай башлай. Бындай хәлдәрҙең киләсәктә йәмғиәтебеҙ өсөн хәүефле булыуы ихтимал. Ә бит халыҡ аҡылын үҙендә туплаған, зиһененә һеңдергән кеше үҙ көсөнә ышана. Үҙенә ышанған кеше әллә ниндәй ауырлыҡтар алдында ла юғалып ҡалмай, ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сығырға үҙендә көс таба, сөнки халыҡ аҡылына таянған кешенең эске көсө ныҡ була.

Беҙ йәш быуынды киләсәккә оло маҡсаттар ҡуйып йәшәргә өйрәтергә тейешбеҙ. "Тормош һабаҡтары" - тап ошондай фән, ул йәш быуында мәҙәнилек тәрбиәләй, ул - халыҡ аҡылы, башҡорт мәҙәниәте. Халыҡ аҡылын туплаған кешенең рухы бай була. Кешегә бөтөн фәндәр ҙә кәрәк, һәр береһе үҙ урынында, әммә был - әҙәпкә өйрәтеүсе, мәҙәнилек тәрбиәләүсе предмет. Шул уҡ ваҡытта милли үҙенсәлегебеҙҙе һаҡлап ҡалыу нигеҙе лә.

Олимпиада ваҡыттарында күҙәтә киләм: үҙ мәҙәниәтен яҡшы белгән балалар бөтөнләй икенсе - ғорур, үҙҙәрен ышаныслы тоя, хыялдарын һөйләй, уй-фекерҙәре менән уртаҡлаша. Йәш быуынды белемле, аҡыллы, камил итеп тәрбиәләүҙе маҡсат итеп ҡуябыҙ икән, маҡсатҡа өлгәшеү өсөн халҡыбыҙҙың тәрбиә ҡанундарына, милли үҙенсәлегебеҙгә нигеҙләнергә тейешбеҙ.

**Тәнзилә БИКБАЕВА.**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# НИМӘ ЭҘЛӘЙБЕҘ:

## бәхетме, тәхетме, ләхетме?

**Донъяла көн һайын меңәрләгән ваҡиғалар булып тора. Көн һайын телевизорҙан төрлө илдәрҙә барған мәхшәрҙәрҙе күҙәтеп, оло борсолоуға төшәбеҙ. Көн һайын кемдер кемендер юғалта, кемдер кемделер таба...**

Кеше тәбиғәте менән бик тә ҡыҙыҡһыныусан, яңынан-яңы тәьҫораттар көҫәп йәшәй торған йән эйәһе. Ә ул тәьҫораттар күберәк йорттарыбыҙ мөйөшөндә урынлашҡан ҡара ҡумталар аша килеп етә беҙгә. Уларға ҡарайбыҙ ҙа, ҡайҙалыр беҙ йәшәмәгән сит ерҙә тормош шундай матур, ҡабатланмаҫ, сәйер тип уйлап, баш әйләндергес хыялдарға сумабыҙ. Ул ерҙәрҙә үҙ тормошоңдо ҡороу ҙа, эшкә урынлашыу ҙа күпкә еңелерәк һымаҡ тойола башлай...

...Теүәл ике йыл элек курсташым һөйгән йәре артынан алыҫ Себер яҡтарына юл тотто. Әллә һөйөүе көслө булды, әллә, күптәр кеүек, Себер яҡтарында аҡсаны көрәп алып була, тигәнгә алданды. Ә шулай ҙа донъя беҙ теләгәнсә генә бармай шул. Теге ҡыҙҙың да егетенә булған мөхәббәте тиҙ арала селпәрәмә килде. Ул Себерҙән дә, егетенән дә төңөлөп, тыуған яҡтарына иҫән-һау әйләнеп ҡайтты, һәйбәт

ТАРИХИ ФАРАЗДАР

# БЕРЕБЕҘ САҠ БУЛДЫ, БЕРЕБЕҘ СУҠ БУЛДЫ...

**Башҡортостанда ҡатын-ҡыҙ биҙәүестәре итеп ҡулланылған боронғо сулпы һәм көмбәҙҙәр һаҡлана әле. Әлегәсә уларҙағы яҙыуҙар өйрәнелмәне, хатта уларҙы "яҙма" тип таныусылар ҙа һирәк булды. Тикшеренеүҙәр үткәргәс, байтаҡ мәғлүмәттәр асыҡланды. Баҡтиһәң, был сулпы-көмбәҙҙәрҙә башҡорттарҙың боронғо көйҙәре, фәтеүәләре сүкелгән икән. Сулпы-көмбәҙҙәрҙең яҙмалары брахми, арамей-сирия, ғәрәп, хазар-ҡараит графикаһын һәм "Доңри миһасул ләсин" тигән ноталарҙы ҡулланып башҡарылған.**

Гәзит уҡыусыларҙы боронғо башҡорт көйө сүкелгән бер сулпы менән таныштырып үткем килә. Башҡорт музыка сәнғәте бик бай тарихлы ул. Уның тарихы IV-VII быуаттарҙағы манихей, нугҙар (несториан да тиҙәр), хазар-ҡараит дини тәғлимәттәрен, ислам динен тотоусы ата-бабаларыбыҙҙың көйҙәренә һәм мөнәжәттәренә барып тоташалыр, тигән фараз бар.

Билдәле төркиәтсе Зиглинг (Sieqlinq) үҙенең хеҙмәттәренең береһендә Дхармачандра исемле будда монахы күсереп яҙып ҡалдырған төрки көйөн теркәп ҡалдыра. Тексттың алдында уның үлсәме лә бирелгән (тохарса A, kanta darsane).

*"Arai sruk alune*
*Pontas skukelle*
*Saraini palsko*
*Twenke kalatarn*
*Cisanta kcama praskau*
*Kani sesketan praskau*
*Cisa praskau pon praskau*
*Apis warnai nrewan tane".*

Хәҙерге башҡорт теленә тәржемәһе түбәндәгесә була:

*"Ир һорай улынан*
*Бөтөнөһө шикеле*
*Сараны белһәк*
*Тегене (үлемде) ҡалдырһаҡ*
*Кисендә кисемдән өркһәм*
*Ғәни сәскәнән өркһәм*
*Кисен өркһәм, төн өркһәм*
*Буш булырҙай нирван тәнем".*

1998 йылда Ейәнсура районындағы Ибрай ауылы кешеһе Ҡыҙрасов Хаҡҡолой Хәбибҡолой улы миңә бер сулпы бүләк иткәйне. Ул уны "Айыры ҡарағай" тигән ерҙә, бесән сапҡан ваҡытта тапҡан булған (һүрәтте ҡара).





Математиканың танып белеү ысулдарын ҡулланып өйрәнгәс, был сулпының башҡорттарҙың "Саҡ-Суҡ бәйете" көйө сүкелгән сулпы икәнлеге асыҡланды.

Был нота яҙмаһының уҡылышы таблицала күрһәтелә:




Хәҙерге нотацияға күсерелеше иһә түбәндәгесә:



Был сулпының, йәғни нота китабының яҙмалары тына (такт) һыҙмалары менән бер-береһенән айырып бирелгән. Әйткәндәй, ошондай уҡ нота яҙмалары Башҡортостандың ҡая-таштарында ла осрай.

Күреүебеҙсә, күсмә халыҡтар бик тә үҙенсәлекле цивилизация төҙөгән булып сыға. Был цивилизацияла уҡыу әсбаптары итеп тап ҡатын-ҡыҙ биҙәүестәре (сулпы, көмбәҙ, беләҙек һ.б.) ҡулланылған. Ысынлап та , ир-ат йә көтөүҙә, йә һуғышта булғанда йәш быуынды тәрбиәләү тап ҡатындар елкәһенә төшә. Сулпы-көмбәҙҙәрҙә көйҙәр ҙә, әлифбалар ҙа, йыл иҫәптәре лә, фәтеүәләр ҙә яҙып теркәлә.

Әйткәндәй, күптәр, бәлки, белмәйҙер ҙә әле: "сулпы" һүҙе хәҙерге башҡорт телебеҙгә "онотолған ҡиммәттәр" тип, ә "көмбәҙ" һүҙе иһә "дөйөм башланғыстар" тип тәржемә ителә.

**Иршат ЙӘНБИРҘИН.**

---

кенә бер фирмаға эшкә урынлашты. Себергә сәйәхәтен алама төш кеүек хәтерләй хәҙер...

...Студент саҡтан яҡын дуҫым Мәскәүҙәге бер университетта яҡшы билдәләргә генә өлгәшеп уҡып йөрөнө. Магистратураға ла бер ҡаршылыҡһыҙ уҡырға инеп китте, бик башлы егет ине. Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тыуған яҡтарына үҙ аяҡтары менән ҡайта алманы. Уҡыған ваҡытта уҡ эшкә урынлашты. Эш менән булып, дәрестәренә даими йөрөй алмай башлағас, уҡыуынан ҡыуылды. Шунан башкөллө эшкә сумды ул. Интернет селтәрендә "Бәйләнештә" һәр ваҡыт "Мин шул хәтлем арыным, ҡайтҡым килә..." тип яҙғылай ине. Тик, нишләптер, ҡайтырға ла ашыҡманы. Иртәнән кискә тиклем сәйер башлыҡтарына бил бөктө, бахыр. Август айында был яҡты донъянан китеүе тураһында хәбәр алдыҡ. Сәбәптәрен бөгөнгәсә бер кем дә белмәй. Бында, Башҡортостанда, уның тома-һуҡыр инвалид әсәһе япа-яңғыҙы тороп ҡалды...

...Work and travel бөтә илдәргә билдәлелек яулаған компания. Ошо компанияның өгөтөнә эйәреп, йыл һайын байтаҡ студент халҡы инглиз телен ныҡлап өйрәнергә, әҙерәк аҡса эшләргә, сит илдәр буйлап гиҙеү бәхетенә өлгәшергә тип, Америка яҡтарына китә. Берәүҙәрҙең ата-әсәһе балаһының хыялына ҡаршы сыҡмайынса, кредиттар ала, машинаһын һата, икенселәре бер юлы ике-өс эштә эшләп, тейешле аҡса туплай. Төркөмөбөҙҙәге бер нисә курсташыбыҙ ана шулай беҙ киноларҙан ғына ҡарап белгән Америкала эшләп, иҫтәре китеп ҡайтҡайны бер ваҡыт. Юҡ, рухланып түгел, киреһенсә, тыуған яҡтарыбыҙҙы һағынып, юҡһынып ҡайтып кергәйнеләр, бисаралар. Сит илдәрҙә Рәсәй халҡын хайуан менән бер рәткә ҡуялар, беҙҙе мәғәнәһеҙ һәм бөтөнләй әҙәп-әхлаҡ нормаларын да белмәгән кешеләр тип күҙ алдына килтерәләр икәнен ишетеп беләбеҙ. Әлеге курсташтарым был фекерҙәрҙе, ҡырын, мыҫҡыллы ҡараштарҙы үҙҙәрендә лә татып ҡарағайны, уфылдауҙары ла шунан ине...

Эйе, йыш ҡына йәштәр бер көн менән йәшәргә өндәгән, "Бөтә нимәне лә татып ҡара!" тигән девиздар менән йәлеп иткән саҡырыуҙарға алданып, йәйге каникулдар мәлендә, йә уҡыуын тамамлағас, сит тарафтарға юлланырға атлығып тора. Хатта барған илендә ғаилә ҡороп, ғүмерлеккә башҡа ил гражданы булып китеүҙе зарур күргәндәр ҙә йышая башланы. Ҡайһы бер ата-әсәләрҙең: "Минең ҡыҙым французда кейәүҙә", - тип ғорурланып һөйләгәненә лә шаһит булған бар. Әммә бындай ялған ғорурланыуҙар, ялтырауыҡтар, аҡсаның алдаҡсы ләззәт икәнен, теләктәрҙең беҙҙе хаталы юлға этәреүен аңлаһын ине йәштәребеҙ. Кеше күңеле һәр саҡ нимәлер эҙләй инде ул, эҙләгәне йә бәхет, йә тәхет, йә ләхет була.

**Ә ШУЛАЙ ҘА...**

**Балалар белем алһын, башлы-күҙле булһын, тип, әллә нисәмә эштә эшләп йонсоған ата-әсәләр ҙә уйланһын ине бер аҙ: балалары, ысынлап та, уҡып йөрөймө, әллә башҡа юлдамы? Күҙ нурылай күреп үҫтергән балаһы уның өмөттәрен аҡлармы, ҡартайған көнөндә таянысы булырмы? Балаларын оло ғилем артынан йыраҡ ҡалаларға, сит ерҙәргә ебәрер алдынан да оҙаҡ итеп уйларға кәрәктер атай-әсәйҙәргә. Әйләнеп ҡайтырмы балаһы үҙенең тыуған яҡтарына, ата-әсәһенә, халҡына хеҙмәт итерме? Ә бит был үтә мөһим.**

**Алһыу ҠЫҘРАСОВА.**

---

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

## БАШҠОРТТАР
## Кейем-һалым һәм биҙәүестәр

Оло йәштәге ҡатындар һәм йәш ҡыҙҙар сәстәренә ҡаралыҡ - осо суҡланған дүрт йәки биш ептән торған бау үргән. Ололарҙа ул ҡара төҫтә булған, йәштәрҙеке - төрлө төҫлө. Бик йыш йәш ҡатын-ҡыҙ, бигерәк тә ҡыҙҙар сәстәренә селтәрле йәки биҙәкле, төҫлө быяла ҡаштар һәм төрлө таштар ҡуйылған сулпы таҡҡан (һүрәт). Бик йыш сулпы урынына ирле ҡатын-хужабикәләр сәстәренә аҫҡыстар үргән.



Ҡыҙҙарҙың махсус сәс биҙәүесе булып сәсмәү, елкәлек һәм арҡалыҡ торған.

Сәсмәү бер нисә (4-тән алып 16-ға тиклем) төрлө төҫлө муйынсаҡтар, быяла йәки мәрйен теҙелгән ептәрҙән торған; улар бер-береһенә ҡайыш йәки ҡурғаш менән нығытылған. Өҫкө яҡтан улар оҙон булмаған епкә беркетелеп, толомға нығытылып ҡуйылған, ә аҫ яғы төрлө төҫтәге ебәк йәки йөн суҡтар менән тамамланған. Сәсмәүҙең оҙонлоғо 40-65 сантиметр булған. Ул, нигеҙҙә, Урал аръяғының тотош көнсығышында, Көньяҡ Урал тауҙарында, Өфө ҡалаһының төньяҡ параллеленән төньяҡтараҡ булмаған башҡорт крайының көньяҡ һәм үҙәк өлөшөндә таралған.

Елкәлекте ҡыҙҙар толом өҫтөнән йөрөткән. Ул оҙонса, өҫкө яғы уралған туҡыма киҫәге булған ҡалын эслекле, ус аяһы ҙурлығында йәки унан ҙурыраҡ, тотош мәрйен менән ҡапланған, уртаһында йәки өҫ яғында эре аҡыҡ, аҫҡы яғына төҫлө йөн ептәрҙән суҡ ҡуйылған (һүрәт).



Елкәлек көньяҡ һәм көнсығыш территория өсөн хас булһа, төньяҡ һәм көнбайыш ҡатын-ҡыҙҙары өсөн арҡалыҡ, үҙәк Башҡортостан өсөн сәс тәңкәһе хас. Был биҙәүес тар һәм оҙон, төҫлө (һары, йәшел, ҡыҙыл), ике рәт ваҡ көмөш тәңкәләр менән ҡапланған, өҫ яҡта селтәрле тирәсле ҙур аҡыҡ йәки тимер ҡаш беркетелгән туҡыманан тора. Арҡалыҡтың аҫ яғына сулпылар тегелә. Был биҙәүес ҡыҙҙарҙың сәсе өҫтөнән елкәнән билгәсә һәм унан да аҫҡараҡ төшөп тора (һүрәт).



Атап үтелгән биҙәүестәрҙе ҡыҙҙар таҡҡан, ә ҡатындар ҡашмау йөрөткән һәм ул XX быуат башында ҡулланылыштан төшөп ҡалған. Ҡашмауҙы П. С. Паллас сәсбау (чашбау) тип атай. Ул ваҡ көмөш аҡсалар менән ҡапланған башлыҡ, уны таҫтар өҫтөнән кейеп, эйәк аҫтынан бәйләп ҡуялар. В. М. Черемшанский башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ҡыҙыл мәрйен менән бәйләнгән һәм ваҡ көмөш йәки ҡурғаш тәңкәләр менән ҡапланған башлыҡ кейә, тип яҙа. Күсмә башҡорттарҙа ул ҡашбау тип аталһа, ултыраҡ тормош алып барыусыларҙа - таҡыя. Ҡупшы башлыҡты ул кәләпүш тип атай. Был баш кейеме - тәңкә менән ҡапланған шлем формаһындағы башлыҡ. Уның оҙон киң ҡойроғо - олоно була, ул тулыһынса көмөш тәңкәләр, ә ҡойроғо ҡабырсаҡтыр, төҫлө мәрйендәр һәм төрлө тәңкәләр менән ҡаплана (һүрәт).



✓ ***Тыуым күрһәткесенең артыуы 19 муниципаль район һәм 4 ҡала округында күҙәтелә. Иң ҙур күрһәткес Бөрйән (22,4), Баймаҡ (18,7), Әбйәлил (18,4), Хәйбулла (17,7) һәм Учалы (16,8) райондарында.***



# АУЫЛДАР ЙӘНӘ нигеҙҙе дауам итергәме,

**Мин ауылда тыуып үҫтем. Шуға ла ауыл тормошона ҡағылған, ауыл кешеһен борсоған һәр мәсьәлә менән ҡыҙыҡһынам, бигерәк тә халыҡтың ауылдарҙан күпләп күсеп китеүе, уның юҡҡа сыға барыуы йөрәкте һыҙлата. Әлбиттә, халыҡтың ауылдарҙан китеүе бөтә донъяла күҙәтелә, әммә Рәсәйҙә ул айырыуса ҙур тиҙлек менән атҡарыла шикелле. Ошоноң һөҙөмтәһендә илдә көн һайын тиерлек бер ауыл юҡҡа сыға. Башҡортостанда ла ошо уҡ хәл күҙәтелә.**

## "Перспективаһыҙ" мөһөрләләр

Ни өсөн ауылдарыбыҙға "перспективаһыҙ" тигән мөһөр һуғыу йышая? Был хәл нисек, ҡасан башланды? Уны туҡтатып буламы? Ошо һорауҙар тынғы бирмәй миңә. Хәл бигерәк тә мәғариф өлкәһендә оптималләштереүҙәр һөҙөмтәһендә мәктәптәр ябыла башлағас киҫкенләште. Халыҡ һаны кәмеүе, белгестәр етешмәүе, бюджет аҡсаһын һаҡсыл тотоноу кеүек сәбәптәргә бәйле ауылда шулай уҡ фельдшер-акушер пункттары ла ябыла. Йәғни, ауылдарҙа эреләтеү, үҙәкләштереү процесы бара: урта мәктәп, дауахана бер ҙур ауылда ғына ҡалдырыла ла, тирә-яҡтағы ауыл халҡы унда уҡырға йәки дауаланырға йөрөй.

Ауыл ерендә үҙәкләштереү, эреләтеү процесы бөгөн йәки кисә генә башланманы: Рәсәйҙә ул XX быуаттың 30-сы йылдарында уҡ күҙәтелә ине. Әммә тарих төпкөлөнә үк төшмәй, күптән түгелге дәүергә генә күҙ һалайыҡ. Үткән быуаттың 70-се, 80-се йылдары. Тап ошо йылдарҙа миңә "Ленинец", "Советская Башкирия" гәзиттәрендә ауыл тормошо бүлеге хәбәрсеһе булып эшләргә тура килде. Мин ул саҡта ауыл ваҡиғалары уртаһында ҡайнап йәшәнем, ниндәйҙер кимәлдә перспективаһыҙ ауылдар темаһын тикшереп, бер нисә тиҫтә мәҡәлә яҙҙым. Шуның өсөн ауыл темаһын яҡтыртҡан коллегаларым А. Козлов, В. Шмаков менән бер рәттән, республиканың һөнәри премияһына лайыҡ булдым.

Хәтеремдә, ул йылдарҙа ауылдар айырыуса күпләп юҡҡа сыҡты. Был осорҙа колхоздарҙы эреләтеү, колхоз урынына совхоздар ойоштороу процесы тормошҡа ашырылды; ҙур һыуһаҡлағыстар төҙөү сәбәпле, тиҙҙән һыу баҫасаҡ күп ауылдарҙан халыҡ икенсе ауыл-ҡалаларға күсте. Тап ошо ваҡытта "перспективаһыҙ ауылдар" теорияһы тормошҡа аша башланы ла инде. "Алдынғы" тип иҫәпләнгән башланғыс кире һөҙөмтәләргә килтерҙе, йәғни бәләкәй ауылда йәшәүселәр мәктәбе, медпункты, клубы булған ҙурыраҡ ауылдарға күсте. Ҙур ауылдар үҙ сиратында шулай уҡ халыҡ һанын юғалтып, "перспективаһыҙға" әйләнде. 2013 йылдың октябрь айында "Россия 1" телеканалында Никита Михалковтың ташландыҡ ауылдар тураһында төшөрөлгән "Чужая земля" тип аталған фильмы күрһәтелгәйне. Был фильм мине шул тиклем һиҫкәндерҙе, уны ҡарағандан һуң мин бөтә тыныслығымды юғалттым. Ташландыҡ хәлендә ҡалған, бөтөнләй юғалыу сигендә торған ауылдар барлығын белә йөрөһәм дә, мәсьәлә мин уйлағандан да киҫкенерәк булып сыҡты.

Ошо ваҡыттан алып ваҡытлы матбуғат биттәрендә был проблема буйынса баҫылған мәҡәләләрҙе күҙәтеп бара башланым. Баҡтиһәң, "перспективаһыҙ" мөһөрө тағылған ауылдар Рәсәй буйынса хисапһыҙ һәм был мәсьәлә бер мине генә борсомай икән.

Аналитик, демография үҫеше һәм уның бөгөнгө тенденциялары буйынса монографиялар һәм мәҡәләләр авторы, Рус доктринаһы эксперты Вениамин Башлачев бына нимәләр яҙа: "Перспективаһыҙ ауылдар" концепцияһы беҙҙе нимәгә килтерҙе? Төпкөл ауыл - ул өләшләтә хужалыҡ итеү зонаһы. Хатта "мозаикалы ландшафт" тигән төшөнсә лә бар. Бына, мәҫәлән, ауыл икән, ти, уның тирәләй баҫыу урынлашҡан, бер яҡта - сиҙәм, икенсе яҡта - һаҙ йә урман. Тимәк, ауыл кешеләре ерҙең айырым өлөштәрендә генә хужалыҡ эштәре менән шөғөлләнә ала. Ҡара тупраҡлы булмаған ерҙәрҙә 10 өйҙән, уртасаһы - 20-30 өйҙән торған ауылдар күпселекте тәшкил иткән, иң ҙур ауылдарҙа өйҙәр һаны 50-нән дә артыҡ булмаған. Шуға күрә, ошондай бәләкәй ауылдарҙы перспективаһыҙ тип иҫәпләп, халыҡты үҙәккә күсерә башлайҙар. Был нимәгә килтерә? Илебеҙҙең ҡара тупраҡлы булмаған өлөшөндә 235 мең ауыл юҡҡа сыға. Ауыл хужалығы әйләнешенең 35 процентын тәшкил итеүсе миллионлаған гектар ер эштән сығарыла. Шуға күрә, сит илдән тәүге тапҡыр 1963 йылда икмәк индерергә тура килә, ә бойҙайҙы йыл һайын ситтән һатып алыу процесы 1972 йылдан бойомға ашырыла. Ситтән индерелгән бойҙай күләме 1970-1980 йылдар дауамында 14 тапҡырға артып та өлгөрә. Нәҡ шул осорҙа Америка беҙҙе бойҙай менән тәьмин итеүгә әүҙем тотона. Ситтән индерелгән иттең күләме 5 тапҡырға, аҡ май 184 тапҡырға арта. Ауыл хужалығы өлкәһендә юғалтыуҙар нимәгә килтереүенә беҙ ошо саҡта тулыһынса төшөндөк, буғай. Әйҙәгеҙ, перспективаһыҙ ауылдар концепцияһы тыуҙырған юғалтыуҙарҙы барлайыҡ. 235 ауыл тулыһынса юҡҡа сыҡты, халыҡтың 40 проценты ғына ауылда тормош көтөүҙе хуп күрә. Тыуым буйынса ауылдар индергән өлөш өс тапҡырға тиерлек ҡыҫҡарҙы. Минең иҫәпләүем буйынса, перспективаһыҙ ауылдарҙы юҡҡа сығарыу һөҙөмтәһендә 2 миллион бала тыумай ҡалған..."



Әгәр ҙә Вениамин Башлачевтың тыуымға ҡарата булған был фекерен беҙҙең Башҡортостан миҫалында ҡараһаҡ, ауылдар бөтөүе республикабыҙҙың иҡтисадына хәүеф менән янай. Сөнки Башҡортостанда тыуым күрһәткесенең юғары булыуы ауыл ерендә йәшәүсе халыҡ һаны менән туранан-тура бәйле. Быйыл 13 мартта үткәрелгән республика Хөкүмәте ултырышында килтерелгән һандар менән танышып китәйек: алдан билдәләнгән йомғаҡтарға ярашлы, республикала 2013 йылда 59 меңдән ашыу бала донъяға килә, был һан 2012 йылдағыға ҡарағанда күберәк. Рәсәйҙә тыуымдың абсолют күрһәткесе буйынса республика Мәскәү ҡалаһы, Мәскәү өлкәһе, Краснодар крайы һәм Свердловск өлкәһенән ҡалышып, бишенсе урында килә. Тыуым күрһәткесенең артыуы 19 муниципаль район һәм 4 ҡала округында күҙәтелә. Иң ҙур күрһәткес Бөрйән (22,4), Баймаҡ (18,7), Әбйәлил (18,4), Хәйбулла (17,7) һәм Учалы (16,8) райондарында. Хәҙер ошо райондарҙа төрлө сәбәптәр менән ауылдар юҡҡа сыға башлауын күҙ алдына килтерәйек. Был ауыл халҡы кинәт әҙәйеүен, тыуым һаны кәмеүен, республикала кеше ресурсы түбәнәйеүен күҙаллай. Әйтәйек, Әбйәлил, Учалы, Баймаҡ райондарындағы ауыл халҡы Силәбе, Свердловск өлкәләренә, ә Хәйбулла, Ейәнсура райондарынан Ырымбур өлкәһенә күсеп китәсәк. Берҙән, саф башҡорт райондарында башҡорт милләтле халыҡтың һаны кәмеүгә, икенсенән, перспективаһыҙ ауылдар исемлегенә яңынан-яңы атамалар өҫтәлеүгә килтерәсәк был процесс.

***Ошондай бәләкәй ауылдарҙы перспективаһыҙ тип иҫәпләп, халыҡты үҙәккә күсерә башлайҙар. Был нимәгә килтерә? Илебеҙҙең ҡара тупраҡлы булмаған өлөшөндә 235 мең ауыл юҡҡа сыға. Ауыл хужалығы әйләнешенең 35 процентын тәшкил итеүсе миллионлаған гектар ер эштән сығарыла. Шуға күрә, сит илдән тәүге тапҡыр 1963 йылда икмәк индерергә тура килә, ә бойҙайҙы йыл һайын ситтән һатып алыу процесы 1972 йылдан бойомға ашырыла. Ситтән индерелгән бойҙай күләме 1970-1980 йылдар дауамында 14 тапҡырға артып та өлгөрә. Нәҡ шул осорҙа Америка беҙҙе бойҙай менән тәьмин итеүгә әүҙем тотона. Ситтән индерелгән иттең күләме 5 тапҡырға, аҡ май 184 тапҡырға арта.***

## Беҙҙә генә түгел…

Перспективаһыҙ ауылдарҙы юҡҡа сығарыу процесы әле лә дауам итә. Бер Башҡортостанда ғына түгел, күрше региондарҙа ла ауылдар һаны кәмей бара. Мәҫәлән, Татарстандағы коллегам Э. Ғиззәтуллин ундағы ауылдар тураһында tatarika.ru сайтында бына нимәләр яҙа: "...Татарстанда һуңғы 13 йыл эсендә генә ауылдар һаны 89 берәмеккә кәмене. Ҡасандыр ҙур һаналған ауылдарҙың тулы булмаған урта һәм урта белем биреүсе мәктәптәренә бөгөн беренсе синыфҡа 2-3 уҡыусы ҡабул ителә. Элегерәк ошо уҡ мәктәп биналары бер синыфта 25-40 бала уҡытылған саҡтарҙы ла күргән. Республикала уҡыусылар һаны 40-тан артмаған бындай аҙ комплектлы мәктәптәр 90-дан ашыу. Ул мәктәптәрҙә бер үк уҡытыусы бер нисә предмет буйынса белем бирә. Хатта математика, әҙәбиәт, сит тел, физик культура кеүек төрлө дәрестәрҙе бер кеше уҡытыуына шаһит булған бар. Был осраҡта белем биреүҙең сифаты тураһында әйтеп тороуы артыҡтыр. Шуға ла киләһе өс йыл эсендә аҙ комплектлы урта һәм тулы булмаған урта мәктәптәрҙе башланғысҡа әйләндереү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Юғары синыф уҡыусыларын күрше ауылдарға йөрөтәсәктәр..."

## Ҡуҙанағым…

Күрше Татарстан республикаһында урта белем биреү мәктәптәре һанын яңы ҡыҫҡарта башлаһалар, беҙҙә инде был күренеш күптән бара. Миҫалға Ейәнсура районындағы тыуып үҫкән ауылым - Ҡуҙанаҡты килтергем килә. Ҡуҙанаҡ тирәләй биш ауыл урынлашҡан. Георгиевский һәм Калининскийға - 5-7 км, Ҡыҙыл яр менән Таулыҡайға - 3-4 км, Башҡорт бармағы ауылына тиклем 15 км самаһы ара бар. Был ауылдарҙа мин уҡыған саҡта уҡ башланғыс мәктәп кенә бар ине. Башланғыс белем алғас, күрше ауыл балалары Ҡуҙанаҡ урта мәктәбенә йәйәү йөрөп уҡыны. Йәйен велосипедта, ҡышын саңғыларҙа ла йөрөнөләр. 90-сы йылдарҙағы үҙгәртеп ҡороуҙарҙан һуң ғына мәктәпкә балаларҙы ташыу өсөн автобус бирелде. Ҡуҙанаҡ мәктәбенең интернаты ла була торғайны. Әсәйем тәрбиәсе булып эшләгәс, унда 50-60 ҡына бала йәшәгәне иҫтә ҡалған. Хәҙер инде Георгиевский, Калининский ауылдары юҡҡа сығып, төрлө карталарҙа, белешмәләрҙә, "Википедия" сайтында ғына тороп ҡалды. Хатта башланғыс мәктәбе лә ҡалмаған Ҡыҙыл яр менән Таулыҡай ауылдары әлегә йәшәп килә, әммә уларҙың да киләсәге билдәһеҙ. Тыуған ауылым Ҡуҙанаҡта ла хәлдәр шәптән түгел. Элекке колхоз бөтөрөлдө, кешегә эш юҡ, ауыл халҡы мал аҫырап донъя көтә. Һөтөн, майын, итен, ҡаймағын 16-19 км алыҫлыҡта ятҡан Ҡыуандыҡ станцияһына алып барып һаталар. Әгәр ҙә шул станция булмаһа, транспорт йөрөмәһә, халыҡ нимә менән көн күрер ине икән?..

## "Рәсәй ауылдарының хәтер китабы"

Күрше Силәбелә йәшәүсе этнограф, крайҙы өйрәнеүсе ғалим В. Теплов донъяла аналогы булмаған "Рәсәй ауылдарының хәтер китабы" проектын уйлап тапҡан. Ул юҡҡа сыҡҡан ауылдар реестрын төҙөргә иҫәп тота. "Миненсә, был китапҡа Рәсәйҙең юҡҡа сыҡҡан бөтә ауылдары ла инергә тейеш. Әлеге көндә Силәбе, Свердловск, Ҡурған, Пермь, Тюмень өлкәләренең

# ҺЫНАУ АЛДЫНДА:

## әллә күсеп китергәме?

Рәсәй ауылын тергеҙеү, уға ярҙам итеү буйынса яңы милли проект кәрәк, тип иҫәпләй. Иң мөһиме - яңы милли проект РСФСР-ҙың Ҡара тупраҡлы булмаған зонаһын үҫтереү программаһы яҙмышын ҡабатламаҫҡа тейеш. Ғалим фекеренсә, проект ауылға күсеп килергә теләгән кешеләргә кредит биреүҙе күҙҙә тотоу менән генә сикләнмәҫкә тейеш. Хөкүмәт иң элек ауылды тергеҙеү мәсьәләләренең, тәбиғәткә яҡын булыуҙың өҫтөнлөгөн аңлатыуға иғтибар йүнәлтергә бурыслы. Ҡала халҡы ла ергә тартыла икәнен беләбеҙ, шуға ла улар ҙур мегаполистар ситендәге бәләкәй генә баҡсаларҙа ал-ял белмәй эшләй, баҡсала ял итеүҙе бар нәмәнән өҫтөн күрә бит.

Шулай уҡ ауыл тормошон тергеҙеү мәсьәләһен хәл иткәндә БДБ илдәренән Рәсәйгә күсенергә мәжбүр булған кешеләрҙе лә күҙҙә тоторға кәрәктер.

Һуңғы йылдарҙа Башҡортостанда "Тере ауыл" проекты киң танылыу алды. Шулай ҙа уны тағы ла киңерәк, ҙурыраҡ территорияға таратыу өсөн хөкүмәт ярҙамы кәрәк. Был хаҡта "Электрогазета" яҙып сыҡҡайны инде. Әммә ниндәй генә проекттар, конкурстар үткәрелмәһен, ауылдарҙы бөтөрмәүҙең төп шарты - унда кешегә йәшәү шарттары булдырылырға тейеш. Яҡшы юлдар һалырға, яңы етештереү предприятиелары, эш урындары булдырырға, урта белем биреү мәктәптәре булған ауылдарға балаларҙы автобус менән йөрөтөп уҡытыуҙы тейешенсә хәл итергә кәрәк. Әгәр ауылдарын барлап бөттөм. Хәҙер Башҡортостан, Себер тарафтарына тотонорға торам, планда икенсе өлкәләр ҙә бар", - ти ғалим. В. Теплов фекеренсә, "перспективаһыҙ ауыл" теорияһынан иң ныҡ зыян күргән регион - Киров өлкәһе. Бында 17 меңдән барлығы 5 мең генә ауыл ҡалған. Сыуашстан республикаһы ғына һөйөндөрә: бындағы тарихи яҡтан тамыры ныҡ булған ауылдар заман елдәренә аҙ бирешкән. Теплов өлкәнең крайҙы өйрәнеү музейында эшләгән дәүерендә йыш ҡына экспедицияларға сыға. Ул таулы завод төбәге ауылдарының хәлен бигерәк тә аяныслы, тип иҫәпләй. Мәҫәлән, Әшә районы Илек ауылынан һуңғы ике йылда ике йөҙ кешенең етмеше күсеп киткән, буш өйҙәр һаны артҡандан-арта бара...

### Нисек ярҙам итергә?

Ауылға нисек ярҙам итергә һуң? Мәҫәлән, шул уҡ Теплов, ҙә уҡыусыларҙы мәктәпкә алып барыу график буйынса, тейешле кимәлдә ойошторолһа, аҙ комплектлы мәктәптәрҙе ябыу ата-әсәләр тарафынан ул тиклем оло көсөргәнеш менән ҡабул ителмәҫ ине.

### Ҙурҙан ҡубыу үҙен аҡламаясаҡ

Күптән түгел Башҡортостан фермерҙары берлеге рәйесе Зифҡәт Ислам улы Сәйетғәлиев менән әңгәмәләшкәйнек. Перспективаһыҙ ауылдар проблемаһына ҡарата уның үҙ фекере бар. Зифҡәт Ислам улы ауыл ерендә производствоның бер ғаилә эшмәкәрлегенә ҡайтып ҡалған төрөн - ҙур булмаған фермаларҙы үҫтерергә кәрәк, тип һанай. Эйе, бөгөн бөтә өлкәләрҙә лә глобалләшеү процесы бара, эре хужалыҡ комплекстары төҙөлә. Мәҫәлән, "Таврос" компанияһының инвестициялау проекты республиканың бер нисә районында, шул иҫәптән Благоварҙа ла йылына 70 мең сусҡа ите етештереүсе эре комплекстар төҙөүҙе күҙаллай. Бүздәк районында 12 мең баш һыйыр аҫрарлыҡ комплекстың төҙөлөш эштәре тамамланырға тора, бында көнөнә 400 тонна һөт алыу планлаштырыла. Әммә был эре хужалыҡтар ауыл халҡын эш менән тәьмин итеүҙе күҙалламай. Сөнки, билдәле булыуынса, ундай ҙур комплекстарҙа бөтөн нәмә автоматлаштырылған була, махсус ҡоролмалар артынан күҙәтеп тороу өсөн күп кеше кәрәк булмаясаҡ. Ә бит халыҡ ауыл ерендә йәшәргә ҡалһын өсөн эш урындары менән тәьмин итеү иң мөһиме һанала. Тағы ла шуны әйтергә кәрәк: бындай глобаль проекттар малдың инфекция, төрлө ауырыуҙарға бирешеп, күпләп үлеүе менән дә хәүефле.

-Совет заманында Әлшәй районында Яңы Раевка, Өфө районында Яңы Николаевка кеүек эре комплекстар төҙөлдө. Бөгөнгө көндә ҡайҙа һуң улар? - тигән һорау ҡуя Сәйетғәлиев. Ул комплекстар бөтәһе лә тарҡалды, юҡҡа сыҡты. Ә бына ҙур булмаған фермаларҙа мал ауырыуҙары, продукцияны һатыу буйынса проблемалар киҫкен тормай, кешегә лә эш була, тигән ҡарашта белгес. Әлбиттә етештерелгән продукцияны һатып ебәреү тейешенсә ойошторолған булырға тейеш. Был өлкәлә З. Сәйетғәлиев сит илдәрҙән өлгө алырға кәңәш итә. Ул үҙе яңыраҡ ҡына Мәскәүҙә үткәрелгән фермерҙар съезында булып, Америка, Финляндия илдәренән килеүсе фермерҙарҙы тыңлап ҡайтҡан.

- Был алдынғы илдәрҙә ауыл хужалығын, ҙур булмаған фермаларҙы күтәреү өсөн ни тиклем оло эш башҡарылыуын ишетеп, аптыраным, - ти Зифҡәт Ислам улы. - Унда хөкүмәт тарафынан бүленгән субсидиялар күләме ҙур икән. Мәҫәлән, Германияла бер гектарға 25 мең, Финляндияла 28 мең аҡса бүленә. Беҙҙә иһә, бер гектарға 250-300 һум ғына аҡса бирелә. Сағыштырғыһыҙ күрһәткестәр был. Американың Айова штатында ғына ла бөтөн Рәсәй етештергәндәй продукция етештерелә. Ә Финляндияла ваҡ хужалыҡтар әҙер продукция етештерә...

Рәсәйҙә иһә, бәләкәй фермер хужалыҡтарына хөкүмәт тарафынан ярҙам аҙ күрһәтелә икәне йәшерен-батырын түгел. Улар үҙ продукцияһын юғары хаҡҡа сығарып һата алмай, килем сығым күләменә ҡарағанда түбәнерәк. Шуға күрә, Сәйетғәлиевтың, ауыл ерендә халыҡҡа лайыҡлы эш хаҡы алырлыҡ эш урындары, хужалығын ойошторор, аҡса табыу өсөн тейешле шарттар тыуҙырылған осраҡта ғына кешеләр унда йәшәргә ҡаласаҡ, тигән фекере менән мин дә килешәм. Сөнки, хатта ауылда газ, асфальт, яҡшы мәҙәниәт йорто, мәктәп булып та, үҙенде ашатырлыҡ, балаларыңды етеш тормош менән тәьмин итерлек шарттар булмаған осраҡта, кем ауылда ҡалырға теләк белдерһен!

### Башҡортоң бишеге ауыл бит

Ә бит ауыл - ул башҡорттоң бишеге, таланттар сығанағы. Башҡорт мәҙәниәтен әҙәбиәт, шиғриәт, музыка, бейеү сәнғәте, һынлы сәнғәт өлкәләрендәге таланттар менән әле һаман ауыл тәьмин итә. Ауылдар башҡорт халҡының милли үҙаңын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, туған телен һаҡлап ҡалыр төп йәшәү урыны. Киң билдәле башҡорт халыҡ яҙыусылары, шағирҙары, эстрада йырсылары, рәссамдарын алып ҡарағанда ла, Мостай Кәрим, Рәми Ғариповтарҙан башлап бөгөнгө көндә ижад итеүселәргә тиклем - бөтәһе лә сығыштары буйынса ауыл еренән. Бөйөк йырсы Рамаҙан Йәнбәков бына нимә ти: "Башҡорт йырҙарын башҡарыу өсөн ауыл ерендә тыуып үҫергә кәрәк. Был оҫталыҡҡа оло быуын кешеләренән өйрәнеү мотлаҡ. Йыр һәр ваҡыт крәҫтиәнгә ауыр хужалыҡ эштәрен башҡарыуҙа изге ярҙамсы, байрамдарҙа күңел күтәреүсе, көс биреүсе булған. Бынан тыш, хозур тәбиғәт - бейек тауҙар, саф һыулы йылғалар, үтеп сыҡмаҫлыҡ ҡалын урмандар булыуы шарт... Ел иҫкән, шишмә сылтыраған, һандуғас һайраған, ҡурай уйнаған тауыштар ишетелһен. Ошо тауыштарҙы тыңлап, күңеленә һеңдереп, иҫеңдә ҡалдырып барырға кәрәк, шул саҡ улар һин башҡарған йырҙарҙа сағылыш табасаҡ..." Ошо уҡ һүҙҙәр рәссамдар, шағирҙар, яҙыусылар ижады тураһында һөйләгәндә лә мөһим. Шуға күрә, республика халҡының 40 процентын тәшкил итеүсе ауыл халҡы, асылда, иң ҡиммәтле байлығыбыҙ. Был байлыҡты ҡәҙерләргә, уны һаҡларға кәрәк. "Перспективаһыҙ ауыл" мөһөрө тағылған бәләкәй ауылдарыбыҙға йәштәрҙе йәлеп итеү, был ауылдарға яңынан йән өрөп ебәреү өсөн төрлө конкурстар үткәреү, китаптар яҙыу ғына етмәй шул. Ауылдарҙы тергеҙеү буйынса бөтә яҡлап уйланылған, хөкүмәт кимәлендә эшләнгән бер стратегик проект кәрәк.

> ***Бөйөк йырсы Рамаҙан Йәнбәков бына нимә ти: "Башҡорт йырҙарын башҡарыу өсөн ауыл ерендә тыуып үҫергә кәрәк. Был оҫталыҡҡа оло быуын кешеләренән өйрәнеү мотлаҡ. Йыр һәр ваҡыт крәҫтиәнгә ауыр хужалыҡ эштәрен башҡарыуҙа изге ярҙамсы, байрамдарҙа күңел күтәреүсе, көс биреүсе булған. Бынан тыш, хозур тәбиғәт - бейек тауҙар, саф һыулы йылғалар, үтеп сыҡмаҫлыҡ ҡалын урмандар булыуы шарт... Ел иҫкән, шишмә сылтыраған, һандуғас һайраған, ҡурай уйнаған тауыштар ишетелһен. Ошо тауыштарҙы тыңлап, күңеленә һеңдереп, иҫеңдә ҡалдырып барырға кәрәк, шул саҡ улар һин башҡарған йырҙарҙа сағылыш табасаҡ..." Ошо уҡ һүҙҙәр рәссамдар, шағирҙар, яҙыусылар ижады тураһында һөйләгәндә лә мөһим.***

### Тәбиғи хәл түгелме?

Бәлки, ауылдар юҡҡа сыға, халыҡ ҡалаларға күсеп бөтөп бара, тип борсолоу урынһыҙҙыр? Йәмғиәт үҙгәреү, йәшәү шарттары яҡшырыу менән бер рәттә барырға тейешле процесс түгелме икән был? Мәҫәлән, донъя буйынса төрлө өлкәләрҙә алдынғы позиция яулаған Америка Ҡушма Штаттарында ауылдар бөтөнләй юҡ, тик шәхси фермалар һәм бәләкәй ҡалалар ғына бар. Хатта ундағы ҡайһы бер ҡала беҙҙең ауылдан күпкә ҙур ҙа түгел, ни бары 800-1000 кеше йәшәй. Халыҡ һаны аҙ булыуға ҡарамаҫтан, ул тулы хоҡуҡлы ҡала: бында муниципалитет, ғибәҙәтхана, мәктәп, судья, нотариус һ.б. ҡала ойошмалары бар. Беҙҙә ауыл хужалығы тармағында 20 процент кеше эшләгәндә, АҠШ-та ни бары 4 процент кеше мәшғүл. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, АҠШ фермерҙары үҙ илен генә түгел, ярты донъяны аҙыҡ-түлек менән тәьмин итә тиерлек. Ауыл хужалығы өсөн ҡулайлы ерҙәре сикһеҙ булған Рәсәй АҠШ-тан бойҙай, тауыҡ боттары һ.б. аҙыҡ-түлек тауарҙары һатып ала. Татар коллегам Э. Ғиззәтуллин әйтмешләй, хатта бәләкәй генә Израиль дәүләтендә лә 5 процент кеше ауыл хужалығы тармағында хеҙмәт итеп, бөтөн донъя кимәлендә продукция етештереүсе ил булараҡ билдәле. Шулай ҙа мин уның менән килешеп етмәйем. Рәсәй - Америка түгел, йәһүд халҡы менән дә беҙ ярыша алмайбыҙ. Һәр халыҡтың үҙ менталитеты, үҫеш юлы бар. Унда ауылдарҙы бөтөрәләр, тип, беҙҙә лә шул эшкә тотонһаҡ, Башҡортостаныбыҙ миҫалында ғына ла әллә күпме милләттәр мәҙәниәте юҡҡа сығыуын күҙәтергә тура киләсәк. Башҡорт, татар, мари, сыуаш, мордва, удмурт һ.б. милләт халыҡтарының мәҙәниәте генә лә түгел, теле, рухи байлығы, милли үҙенсәлеге юғаласаҡ. Шуға күрә лә ауылдар йәшәргә тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Силәбе ғалимы Теплов "Рәсәй ауылдарының хәтер китабы" тигән хеҙмәтенең дәүләт эшмәкәрҙәренә ауылдағы хәлдәрҙе өйрәнеүгә, ауылды тергеҙеүгә ярҙам итеренә ышана. Әгәр ҙә был перспективаһыҙ ауылдар процесын кирегә әйләндереп булһа, китаптағы мәғлүмәт яңы ауылдарҙы буш урында түгел, ә тарихи ерҙә, кешеләр быуаттар буйы йәшәгән урынында тергеҙергә ярҙам итәсәк. Ғалимдың Башҡортостан буйынса ла тикшереүҙәр үткәреүе ҡыуандыра. Төҙөлгәнде емереүе анһат ул, тергеҙеүе еңелдән түгел. Шулай ҙа киләсәктә сәйәсәт арҡаһында нигеҙ таштары һерәйеп ҡалған беҙҙең ауылдар кире терелер, аяҡҡа баҫыр, тип ышанғы килә. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ был турала, хөрмәтле гәзит уҡыусылар? Фекерләшәйек әле.**

**Алик ШАКИРОВ,**
**"Башинформ" мәғлүмәт агентлығының баш мөхәррир урынбаҫары.**

✓ *Насип аш ауыҙҙы йырып  килеп инә, тиҙәр бит. Сәбиләһе менән дә шулайыраҡ булды. Уҡытыусы булып ауылға килгәс, уны Ғәрәфиҙәргә күрше Көнһылыу инәйгә фатирға ҡуйҙылар.*






Бөгөн Ғәрәфи ялан кәртәлә торған быҙауҙары янына ғәҙәттәгенән иртәрәк килде. Малҡайҙары ла быны һиҙгәндәй, көйшәүҙәренән туҡтап, аптырай биреберәк йомро күҙҙәрен уға төбәне. Сығырға әйҙәгәндә лә, урындарынан теләр-теләмәҫ кенә тороп, атлар-атламаҫ ҡына баҫып, ҡапҡаға йүнәлделәр. "Әйҙәгеҙ, әйҙә, безәүкәйҙәр, бөгөн иртәрәк сығып, иртәрәк ҡайтырһығыҙ", - тип көтөүсе һуңғы быҙау сыҡҡанын көтөп торҙо ла, ҡапҡаны япты һәм эйәрле күк бейәһенә атланып, үҙәнгә төшөп барған малдары артынан эйәрҙе.

Кәйефе бик күтәренке Ғәрәфиҙең. Шулай булырға тейеш тә. Сөнки байтаҡтан тулҡынланып көткән көн дә килеп етте. Иртәгә ҡыҙының - берҙәнберенең, алтынҡайының туйы һәм бөгөн буласаҡ кейәү менән кәләш кисләтеп кенә ҡайтып, Сәбиләһе менән уны Өфөгә алып китәсәк. Көн алырға ла иҫәбе бар ине Ғәрәфиҙең, әммә ферма мөдире Хызыр: "Ҡайҙан ғына кеше табайым, үҙең берәйһе менән һөйләшеп ҡара", - тигәс, өлгөрөрмөн әле, тип, көтөүгә үҙе сығырға булды. Иң мөһиме, алдағы көндәргә кеше табылды. Торна Мостафа, оҙон муйынына сиртеп: "Күстәнәсте мулыраҡ апҡайтһаң, бер-ике көн көтөрмөн быҙауҙарыңды", - тип, ризалығын бирҙе.

Кис өлгөрөп булмаҫ, тип, таңдан тороп мунсаһын да яғып ҡуйҙы Ғәрәфи. Ҡайтыуына эҫеһе ҡалмаһа ла, йәйге көндә йыуынып сығырға таман ғына булыр, моғайын. Иртәрәк ҡайтһалар, ҡыҙы менән буласаҡ кейәү ҙә мунса инеп сығырҙар. Хәйер, кейәүҙе "буласаҡ" тип тә әйтеп булмай инде хәҙер. Ҡыҙы, мәсеткә барып, никах уҡыттыҡ, тине бит. Тимәк, Хоҙай алдында бурыстарын үтәгәндәр, ир менән ҡатын тип аталырға тулы хоҡуҡтары бар.

Әлбиттә, атай кешенең матур табын ҡороп, мулла саҡырып, никахты өйөндә уҡытҡыһы, берҙән-бер ҡыҙының оло байрамында төп шаһит булғыһы бик килгәйне лә бит. Нишләйһең, ул уйлағанса килеп сыҡманы. Ишеткәс, йәштәр үҙҙәре беләләр әле, тип, бары үҙүҙен йыуата биреп кенә ҡуйған булды.

Уның ҡарауы, иртәгә туйҙа төп ҡоҙа булып ултырасаҡ. Етмәһә, кемдәр янында бит әле! Кейәүҙең атаһы билдәле профессор икән, нәҫелдәрендә лә уҡымышлылар байтаҡ, ти. Бына кемдәр менән ҡоҙалашасаҡ, артабан кемдәр менән аралашып йәшәйәсәк ул. Әлбиттә, үҙенең ябай бер көтөүсе генә булыуы кәйефте ҡыраҡырыуын, бына шуға туйҙа ла оялып ултырасаҡ әле ул.

-Ниңә, көтөүсе лә кеше, етмәһә, миҙаллы  көтөүсе әле мин, - тип аҡланғандай ҡысҡыра биреп әйтеп ҡуйҙы Ғәрәфи. Аты, был миңә өндәшәме, тигәндәй, ҡолаҡтарын ҡайсылап, башын борғоланы ла, аҙымдарын тиҙләтә һалды. Быҙауҙар уйһыулыҡҡа төшөп етеп, оҙайлы ямғырҙарҙан һуң йәшәреп, күтәрелеп киткән һутлы үләнгә йәбешкәйне инде. Көтөүсе атын һыу буйында туҡтатып, эйәренән төштө һәм ярға ултырып, тыныс ҡына аҡҡан йылғаға текләне лә, тағы уйға батты.

Ябай көтөүсе булһа ла, ниндәй ҡыҙ үҫтерҙе әле ул! Айгөлдәре университетты ҡыҙыл дипломға тамамлап, аспирантураға уҡырға инде. Шул уҡ университетта уҡытып та йөрөй. Кем белә, бәлки, ул да, ҡоҙалары һымаҡ, атаҡлы профессор булып китер. Уҡыһа, Ғәрәфи үҙе лә берәй арыу һөнәр алып, шәп кенә кеше булып китер ине, моғайын. Бына шул уҡыу эләкмәне. Нужа уны бик иртә атҡа мендереп, ҡулына сыбыртҡы тоттороп ҡуйҙы. Уның ҡарауы, бик иртә тол ҡалған әсәһе менән икәүләшеп, ҡустыһын да, һеңлеһен дә уҡытып сығарып, кеше итә алдылар. Зариф хәҙер билдәле генә хирург. Әклимә - мәктәп директоры. Туйҙа ҡыҙ яғынан да күрһәтерлек кешеләре бар. Миҙалын тағып, шулар менән бер тирәләрәк ултырһа, көтөүселеге бик күренмәҫ әле. Ул байтаҡ йылдар элек үк бирелгән "Фиҙаҡәр хеҙмәт өсөн" тигән миҙалды соҡоп сығарып, һөрткөләп, костюмы кеҫәһенә һалып ҡуйғайны инде. "Быны таҡһам, килешерме, ҡупырсыҡ, тип әйтмәҫтәрме икән?" - тип ҡатынына өндәшкәйне, уныһы, үҙең беләһең, тигәндәй, яурындарын ғына һикертеп ҡуйҙы. Башҡа күрһәтерлек нәмәң булмағас, нишләйһең инде. Тик бына костюмы ғына иҫкерәк. Яңыһын алыуға рәттәре лә ҡалманы. Айгөл: "Туй ресторанда үтәсәк, аҡса бик мул кәрәк буласаҡ", - тигәс, бар мал-тыуарҙарын, хатта нәҫелгә ҡалдырырмын, тип йөрөгән матур ғына танаһын да һуйып һатырға тура килде. Кешенән дә бурысҡа байтаҡ ҡына аҡса алдылар. Һарайҙа бер һыйыр менән ошо күк бейәһе генә ҡалды хәҙер. Ҡарт атына алмашҡа, тип тотҡан ипле генә холоҡло тайы бар ине, ҡыҙҙары: "Төп ҡоҙағыҙ ҡаҙы менән  ат итенән бешерелгән бишбармаҡты яратам, туй өҫтәлендә лә шулар булырға тейеш, ҡоҙаның һуйырҙай йәш ат-фәләне юҡмы икән, тип әйтә", - тигәс, шундай ҙур кешенең үтенесен кире ҡаҡмайыҡ, тип, тайҙы ла тотондолар. Ҡаҙы әҙерләп, һум иттәрен, ҡабырғаларын сапҡылап, тундырғысҡа тултырып ҡуйҙылар. Ҡыҙҙары бөгөн бына шулар артынан да ҡайтып, бер ыңғай әсәһе менән уны ла алып китергә тейеш.

Был ғүмеркәйҙәр, ай-һай, тиҙ  үтә икән. Сәбиләһе менән кисә генә ҡауышҡан һымаҡ тойолһа ла, егерме дүрт йыл ваҡыт үтеп тә киткән. Үҙе утыҙ йәшен тултырып ҡына өйләнде. Һуңға ҡалыуына әлеге лә баяғы  оялсанлығы ғәйепле инде. Йәш сағында бер ҡыҙға күҙе төшкәйне Ғәрәфиҙең. Әммә уға өндәшергә байтаҡ ҡына баҙнат итмәй йөрөнө. Инде ҡыйыулығы етеп, һүҙ ҡушам, тип йөрөгәндә генә ҡыҙ башҡа берәүгә кейәүгә сыҡты ла китте. Бына шунан һуң үҙен мәмәй ауыҙ тип оҙаҡ ҡына әрләп, ҡыҙҙарға күҙ һалыуҙан төңөлә биреп тә ҡуйҙы.

Насип аш ауыҙҙы йырып килеп инә, тиҙәр бит. Сәбиләһе менән дә шулайыраҡ булды. Уҡытыусы булып ауылға килгәс, уны Ғәрәфиҙәргә күрше Көнһылыу инәйгә фатирға ҡуйҙылар. Инде бик үк йәш тә, төҫ-башҡа ла әллә ни булмаған ҡыҙҙы Ғәрәфи тәү күргәс тә оҡшатты. Күршеләре менән аралашып йәшәйҙәр ине улар. Көнһылыу инәйгә ир-ат ҡулы талап иткән эштәрҙе башҡарырға ла күп ярҙам итте Ғәрәфи. Сәбилә килгәс тә ваҡ-төйәк эш табылып торҙо. Егет уларҙы бик теләп башҡарҙы. Ни тиһәң дә, ҡыҙҙы күрергә, уға бер-ике ауыҙ һүҙ ҡушырға мөмкинлек тыуа. Сәбилә уны башта бик өнәп етмәне, шикелле. Егеткә тәкәббер генә ҡарашын ташлап, уны күрмәмешкә һалышҡан кеше кеүек ҡыланды. Ғәрәфи бының өсөн ҡыҙға асыуланманы ла. Уҡытыусы башы менән ниндәйҙер бер көтөүсегә йәбешеп ятмаҫ инде. Ләкин яңылышҡан булып сыҡты. Килеүенә ярты йыл самаһы ваҡыт үткәс, Сәбилә һарайҙары янында ниҙер эшләп йөрөгән егет янына килде лә, уны ентекләп ҡараштырғылап сыҡҡас: "Былай нисауа күренәһең, әллә һиңә кейәүгә сығырға ла ҡуйырға инде", - тине. Ғәрәфи уның һүҙҙәрен ишеткәс, шаңҡып, ни әйтергә лә белмәй, ауыҙын асты ла ҡалды. Шулай ҙа ике-өс ай самаһы ваҡыт үткәс, ҡыйыулығын йыйып, телгә бөткән дуҫы Харисты яусы итеп, ҡыҙ йәшәгән өйгә барып инде. Сәбилә: "Мин һиңә теге ваҡытта уҡ әйттем бит инде", - тип, шунда уҡ риза булды ла ҡуйҙы. Оҡшаттымы, әллә ҡарт ҡыҙға әйләнеп барам, тип ризалаштымы икән. Ғәрәфи әле һаман уның ғилләһенә төшөнөп етә алмай. Тиҙ арала туй һымаҡ нәмә лә үткәреп ташланылар.

Ул көн, дөрөҫөрәге, төн иҫкә төшһә, Ғәрәфи  әле лә ҡыҙарынып китә. Икеһен келәткә индереп япҡас, ул ни эшләргә лә белмәй, ятыр урын йәйелгән һике ситендә оҙаҡ ултырҙы. Аптыраған көнөнәндер инде, Сәбилә: "Әллә быҙауҙарың араһында йөрөп быҙауға әйләнеп бөткәнһең, егет", - тип, шунда дилбегәне үҙ ҡулына алды. Ғәрәфи ни булғанын да, нисек булғанын да аңғармай ҡалды. Иртән мунсаға барғас та кәләшенең йыуынып сыҡҡанын соланда көтөп тороп, һуңынан үҙе инде. Аҙаҡ ояты ҡасып, ҡатынына эйәләшеп китте-китеүен.

Ғәрәфи урынынан тороп, малдары йөрөгән туғайға күҙ һалды. Быҙауҙары туйынып, йылғаға төшөп һыу эсеп, ял итергә ятҡайны. Бер-нисәһе генә иренә биреп үлән һәрмәштергеләп йөрөй. Күк бейәһе лә ағас күләгәһенә инеп, йә башын, йә ҡойроғон һелкеп, себен-серәкәйҙәрҙе ҡыуып маташа. Ғәрәфи баш осона етеп килгән ҡояшҡа күҙ ташлап алды ла, рюкзагынан һөтлө шешә менән икмәк сығарып, тамаҡ ялғарға тотондо. Аҙаҡ, бер аҙ серем итеп алайым, тип, йомшаҡ үләнгә һуҙылып ятты. Ләкин бындай көндө күҙгә йоҡо инәме ни - уйҙары баштан ашҡан һәм улары тағы үткәндәргә барып  терәлде...

Ғәрәфи өйләнгәнсе үк, бәләкәй генә иҫке өйҙәрен һүтеп, эшләп тә, күпләп мал аҫрап та тапҡан аҡсаһына әсәһе бөртөкләп йыйғанды ла ҡушып, иркен генә өй төҙөп ултыртҡайны инде. Карьерҙан таш сығарып, һарай менән келәт тә һалып ҡуйҙы. Ҡустыһы менән һеңлеһе Өфөгә уҡырға киткәс, өй бушап ҡалған һымаҡ ине. Кәләш төшөргәс, ул тағы тулыланып, күркәмләнеп китте. Ә инде сабыйы тыуғас, бөтөнләй йәмләнде. Һағынып, көтөп алды ул Айгөлөн. Ҡыҙы барлығын ишеткәс, шатлығынан  ауыҙы йырылып, аҙна буйы ябылмай йөрөнө, тиһәң дә ярай. Фермала эшен тиҙ генә тамамлап, һәр көн сабыйы янына ашыҡты. "Нишләптер ялҡауландың, егет, быҙауҙарыңдың привесы кәмегәндәнкәмей", - тип шелтәләп тә алғайны уны ферма мөдире ул саҡ.

**(Дауамы бар).**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

# ҠЫШҠЫ СЕЛЛӘ...

## елләндерә

- Тирләп эшләр - эшең, өйрәтер кешең булһын.
- Ғүмер оҙонлоғо - кемгәлер шатлыҡ, кемгәлер һынау, кемгәлер яза итеп бирелгән Хоҙай бүләге.
- Бурыс инде, хыянат күңелде ҡатыра.
- Яуапһыҙ һорау аяҡһыҙ кеше кеүек.
- Иҫәп-хисап ғәҙел ерҙә ҡулдар күрешә, алыш-биреш харам булһа, баштар бәрешә.
- Маһир ирҙәр ил биҙәр, йүнһеҙенән ил биҙәр.
- Тынғыһыҙ кеше - ташҡын аҡтарған таш, дәртһеҙҙәр - төпкә батып ятҡаны.
- Кәрәккәнен кеше эҙләп таба, кәрәкмәгәнен осраһа ла күрмәй үтә.
- Ҡояш көләүе - һылыу ҡыҙ йылмайыуы, күктәге болот - батыр егет ярһыуы, ел-дауылы ҡарт батырҙың илауы.
- Айға ҡара - янған йөрәгең eләҫләнер, ҡояшҡа баҡ - туңған күңелең йылыныр.
- Еҫкәнгән эт емтек таба, элмәндәге йөй таба ла, сей (ғәйеп) таға.
- Аты барҙа майҙаны, көрәш булһа, батыры табыла.
- Ҡышҡы селлә елләндерә, йәйгеһе сеңләндерә: тормош та шулай - уң яҡтан йылытһа, һулаҡайҙан туңдыра.
- Икеләндергән эш - үҙ башыңа таш бәреү.
- Үҙ белемен аңламаусылар - оҙаҡ йоҡоға талыусылар.
- Һыуға баҫһаң, көсөң артыр, ергә баҫһаң, теләктәрең күккә ашыр.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

**✓ Бөгөн бөтөн донъяла этникаға тартылыу көслө. Сөнки глобаллəшеү шарттарында беҙ йəйлəп бер төрлөгə, бер милләткə əйлəнə барабыҙ кеүек. Ə милли уйын ҡоралдарыбыҙ, халыҡ көйҙəребеҙ беҙҙе бына ошонан һаҡлап тора.**



ИЖАДХАНА

**"Ижадхана" рубрикаһының бөгөнгө геройын барыһы ла башҡорт халыҡ йырҙарын оҫта башҡарыусы уникаль тауыш эйəһе, тип таный. Ошо моңло тауышы уны башҡорт эстрадаһының йəш башҡарыусылары араһынан айырып, хатта юғарыраҡ баҫҡысҡа күтəреп тора кеүек. Халыҡ-ара, Бөтөн Рəсəй, республика конкурстары лауреаты, Х. Əхмəтов исемендəге Башҡорт дəүлəт филармонияһы артисы Марсель ҠОТОЕВ менəн уның ижады хаҡында ғына түгел, халҡыбыҙҙың мəңгелек йырҙары, уларҙың бөгөнгөһө, киләсəге тураһында əңгəмəлəшəбеҙ.**

# ХАЛЫҠ ЙЫРҘАРҺЫҘ...

## йыраусылыҡ булмаҫ



### Эх, һин, Бибинур!

Тәүге тапҡыр ҙур сәхнәгә сығып, халыҡ алдында йырларға баҙнат итеүемə быйыл 20 йыл. Был хәл 1994 йылда Башҡорт дәүләт филармонияһында булды, мин, 8 йәшлек малай, "Сулпылар" телевизион конкурсында ҡатнашып, "Бибинур" йырын йырланым. Бынан һуң күп йылдар үтте, тағы ла күркәмерәк сәхнәләрҙә баҫып торғаным, абруйлыраҡ бәйгеләрҙә ҡатнашҡаным булды, әммә минең ижади тормошомда "Сулпылар"ҙан да бөйөгөрәк һәм әһәмиәтлерәк ваҡиға юҡ. Балалар өсөн генә үткәрелһә лә, уны ойоштороусыларҙың ихласлығын һаман да хәтеремдә һаҡлайым, тап ошо конкурстан һуң мин йырсы булырға теләүемде аңланым.

Мәктәп данын яҡлап, районда төрлө конкурстарҙа күп ҡатнаштым, һәр хәлдә, Баймаҡ районында мине танып-ишетеп белеүселәр күп ине. Һуңғараҡ осорға килгәндә, 2004 йыл минең өсөн бик уңышлы булды. Башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусылар араһында үткәрелгән "Ирәндек моңдары"нда - Гран-приға, "Гөлсәр һандуғас" телевизион фестивалендә "Йыл асышы" номинацияһына лайыҡ булдым. Тамашасыға танылыу ошо фестивалдән һуң килде, телевидениенан күрһәтә башланылар, клиптар төшөрҙөк. 2010 йылда иһә беренсе тапҡыр Хакас республикаһында "Ут йыры" III Халыҡ-ара этник эстрада конкурс-фестивалендә еңеү яулап ҡайттым. Хәҙер инде халыҡ йырына әүерелгән Ишмулла Дилмөхәмәтовтың Салауат Юлаев һүҙҙәренә ижад иткән "Уралым" йырын барыһына ла оҡшаны. Һуңғы осорҙа ситкә йышыраҡ сығырға тырышам, сөнки был ижадсы өсөн шулай уҡ бик мөһим. Филармонияла эшләү дәүерендә бер тапҡыр ҙа айырым концерт биргәнем юҡ, апрель аҙағында тамашасыларымды концертыма саҡырырға ниәтләнәм. Әле шуға әҙерлек эштәре менән мәшғүлмен.

### Заман үтер, йыр ҡалыр...

Заман башҡа, тип, заманға яраҡлашырға, кемгәләр ярарға тырышабыҙ. Әммә замандың заңына ла ҡарамай торған ҡиммәтәребеҙ бар беҙҙең. Әгәр ҙә бөгөнгө шоу-бизнес күҙлегенән эстрада йыры мәңгелек төшөнсәгә дөғүә итә алмай икән, халыҡ йыры бер ҡасан да бөйөклөгөн юғалтмаясаҡ. Шуға, ялған ҡиммәттәр уйлап сығармайыҡсы, һөҙөмтәлә, барыбер бер үк нәмәгә әйләнеп киләсәкбеҙ, тип әйткем килә. Бөгөн халыҡ йырҙарынан торған концерт эшләү төшөмлө түгел, тиҙәр, йәнәһе, тамашасы бындай концертҡа килмәйәсәк. Гастролдәрҙә йөрөгәндә мин быны киреһен күрәм. Бәлки, бынан бер нисә йыл элек халыҡ йырын тыңламайынса, тамаша залын ташлап сығып китеүселәр булғандыр, әммә бөгөн баянға, ҡурайға ҡушылып йырлағанды барыһы ла ярата. Халыҡ йыры - мәңгелек. Ул халҡымдың үткәне лә, бөгөнгөһө лә, киләсәге лә. Беҙ был йырҙарҙы шатлыкта ла, ҡайғыла ла йырлаясаҡбыҙ әле. "Дуҫлыҡ моңо", "Оҙон көй" кеүек бәйгеләр барлыҡҡа килде, йәш башҡарыусылар күбәйә, тимәк, халыҡ йыры сәхнәләрҙә лә яңғыраясаҡ. Башҡортостан юлдаш телевидениеһында барған "Башҡорт йыры" проекты оло табыш, күпме онотолоп яткан йырҙарҙы тергеҙҙе ул.

Халыҡ йырҙарын заманса аранжировкалауға ла ыңғай ҡарайым. Ритмға һалынған халыҡ йырын башҡарыуы енелерәк, тип уйлаусылар барҙыр, әммә был улай түгел. Унан һуң, көйҙә аранжировкалағанда уны ҡыл-ҡумыҙ, башҡа уйын ҡоралдары ҡушып биҙәйһең генә, ә көй үҙенсә ҡала. Бөгөн бөтөн донъяла этникаға тартылыу көслө. Сөнки глобаллəшеү шарттарында беҙ йәйләп бер төрлөгә, бер милләткә әйләнә барабыҙ кеүек. Ә милли уйын ҡоралдарыбыҙ, халыҡ көйҙәребеҙ беҙҙе бына ошонан һаҡлап тора, башҡаларҙан айырып күрһәтә. "Арғымаҡ", "Сураман" кеүек фольклор төркөмдәренең сығышын ситтәр ҙә ярата, уларҙың сығышында халҡыбыҙҙың үҙенсәлеген таный.

### Тауыш - Хоҙай бүләге

Йырсыға тауыштың Хоҙай тарафынан бирелгән оло бүләк икәнлегенә ышанам. Әгәр ҙә был өлөш һинә яҙған икән, тауыштың мотлаҡ халҡыңа хеҙмәт итергә тейеш - был яуаплылыҡты ла тоям. Эстрадаға ҡарағанда, халыҡ йырҙарын башҡарыу күңелемә нығыраҡ ята. Бала саҡта Абдулла Солтанов, Рамаҙан Йәнбәков, Сөләймән Абдуллин, Азамат Тимеровтарҙың яҙмаларын тыңлап өйрәнә инем. Әсәйемдең әсәһе йырланы, гармунда уйнаны, ул минә байтаҡ йырҙар өйрәтеп ҡалдырҙы. Атайымдын атаһы Мәһәҙей ҡартатайым ғүмере буйы колхозда бригадир булып эшләгән. Ул йырҙың рухы күтәреү һәләтенә эйә булыуын яҡшы аңлағандыр, концерттар ойоштороrға ла яратҡан. Уның кеүек "Илсе Ғайса"ны башҡарған кеше юҡ, тиҙәр ауылдаштарым. Әсәйем йырлай, гармунда уйнай, йәш сағында Өфө сәнғәт училищеһына уҡырға ла ингән булған. Ауылын һағыныу кәсләрәк булып сыҡҡанға, уҡыуын тамамламаған. Әле ул Буранбай ауылының "Гәүһәркәй" ансамблендә сығыш яһай. Атайым да моңло тауышлы, тик ул күберәк үҙе өсөн йырлай.

Дөрөҫөн әйткәндә, Баймаҡ районының Буранбай ауылында халыҡ йырын йырламаған кеше юҡ. Нимә сәбәпселәр инде быға - ултырған урынымы, эскән һыуымы, әммә был сергә яуап юҡ. Хәйер, уныһы мөһим дә түгелдер, иң ҡыуандырғаны, буранбайҙар бөгөн дә шәп йырсы тигән данға тап төшөрмәй.

### "Мин - Буранбай..."

Халыҡ йырын башҡарыусы һәр йырсы өсөн камиллыҡтың юғары сиге булып "Буранбай" йырын башҡарыу кимәленә етеү торалыр ул, моғайын. "Буранбай" - әлегә үҙем өсөн генә йырлана торған йыр булып тора. Әлегә тиклем уны сәхнәгә сығарғаным юҡ. Ҡурҡҡандан да, йырлай белмәгәндән дә түгел, иртәрәк, тип иҫәпләгән өсөн генә. Күптәр конкурстарға ошо йыр менән сығырға тырыша. Әммә "Буранбай" ул шундай диапазонлы йыр, уны еренә еткереп йырлау өсөн өйрәнергә лә өйрәнергә әле. Йырлағас, Абдулла Солтанов, Иншар Солтанбаевтар һымаҡ йырларға кәрәк уны.

Ижадыма яуаплы ҡарауым уҡытыусым Камил Абдрахман улы Вәлиевтан килә. Йырсының тәбиғи тауышын боҙмайынса, дөрөҫ ҡуйыуҙа, уны үҫтереүҙә уҡытыусының роле бик ҙур. Бөгөн тамашасы мине халыҡ йырҙарын башҡарыусы йырсы булараҡ һанлай икән, үҙем иһә уҡытыусыма сикһеҙ рәхмәтлемен. Ул, ғөмүмән, студенттарға дөрөҫ йүнәлеш биреп, һәр яҡлап камиллаштыра белә. Сибай сәнғәт училищеһында уҡыған саҡта бәйгеләрҙә лә күпләп ҡатнаша инек, был көндәрҙе бөгөн дә һағынып хәтергә алам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Марсель Ҡотоевтың ижады тураһында телгә алып, тамашасы: "Ул бит халыҡ йырҙарын шәп йырлай!" - тип әйтә икән, йырсыға ҡарата төп оло баһа ошолор, моғайын. Ә кемдер уның йырлағанын ишеткәне юҡ, йәш башҡарыусының Башҡорт дәүләт филармонияһында үтәсәк тәүге ҙур концертына рәхим итһен. Халыҡ ҡоралдары милли оркестры, Эстрада-джаз оркестры ҡатнашлығындағы был тамаша 23 апрелдә буласаҡ. Концертта башҡорт халыҡ йырҙары менән бер рәттән, эстрада йырҙары, дуэттар, сит ил хиттары яңғыраясаҡ. Әйткәндәй, Марсель Ҡотоев үҙен билдәле иткән "Бибинур" йырын да башҡарасаҡ, уның менән бергә "Тамыр" студияһының йәш йырсылары сығыш яһаясаҡ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

ЗАУЫҠ

*Риф МИФТАХОВ*

# ХИКМӘТЛЕ ҺҮҘ КҮП БУЛМАЙ

* * *

Көҙгөнән күренә тән,
Хәмерҙән күренә йән.

* * *

Шашма егет, эсәм тиеп, һаулығым ныҡ,
Хәмер көсөн еңә алған бәндәләр юҡ.

* * *

Ауырыуҙың һәм дарыуҙың булма ҡоло:
Үҙеңдән ныҡ оло табип - аңла шуны.

* * *

Һүҙ эштең тик күләгәһе,
Булмай икән һөҙөмтәһе.

* * *

Һатып алһаң,
Атланып һынарһың атыңды,
Ҡатын алһаң,
Улай ғына һынап булмай ҡатынды.

* * *

Ағас кеүек ҡайһы берәүҙәрҙең эштәре:
Япраҡ шаулай, тик күренмәй емештәре.

* * *

Әсе теле ҡай саҡ ҡалҡан булыр,
Оҙон тел - һәр саҡ зарландырыр.

* * *

Ҡартлыҡ - ғүмерҙең ысыны:
Өйрәнергә - йәшәү ысулы.

* * *

Яҡының сисһә серен,
Ул йәнеңдә серен.

* * *

Һауаланыу, күрә алмау -
Ваҡ йәнеңдән ҙур булалмау.

* * *

Ант итеүҙәр булһа үтә нык,
Мөхәббәттең ҡай саҡ үҙе юҡ.

* * *

Мөхәббәт ут йоттормаһа,
Бармы һуң ул был донъяла?

* * *

Һәр бер һаҡаллы түгел аҡыллы.

* * *

Һәр бер мыйыҡлы түгел ҡыҙыҡлы.

* * *

Һәр бер киң маңлай - Сократ булалмай.

* * *

Ынтылабыҙ белемгә -
Наҙанлыҡты белергә.

* * *

Һәр бүрекле түгел ирекле.

* * *

Һәр "төшөргән" - үлмәй эсеүҙән.

* * *

Әсә ҡыҙын аңламаһа,
Ата улын һанламаһа:
Йылдар үткәс ошо хәлдәр
Киреһенсә ҡабатлана.

* * *

Ҡатын-ҡыҙға насар уйҙа булма,
Хөкөм итмә үтә бер яҡлы:
Хаталары, гонаһтары булһа,
Былар өсөн беҙ ҙә гонаһлы.

* * *

Ғаилә ебе - нәҙек, нескә еп,
Ел ҡаҡһа ла ҡайсаҡ өҙөлә.
Өҙөлгәндә ауыр ялғауы,
Ә ялғанһа, йөйө һиҙелә.

* * *

Ерҙә унан оло бер ни булмаҫ,
Ай-йондоҙға осоп етһәк тә.
Ил ҡәҙере, кеше бөйөклөгө
Хикмәттәргә хикмәт - икмәктә!

**(Дауамы бар).**

*ИНТЕРНЕТТАН*



# ҒАИЛӘ НЫҠЛЫҒЫ...

## ир-егеттән тора

■ Оҙон, ялтырап торған сәстәр - ҡатын-ҡыҙҙың сәләмәтлек күрһәткесе икәнен барыһы ла белә. Сәстәр өсөн "витаминдар" етештереү индустрияһы иң уңышлы өлкәләрҙең береһе иҫәпләнә, сөнки гүзәл заттар ҙа, ир-егеттәр ҙә матур сәсле булырға теләй, һөҙөмтәлә, төрлө биологик өҫтәмәләр, витаминдар һатып алыу өсөн байтаҡ ҡына аҡса түгә. Белгестәр фекеренсә, ниндәйҙер тикшеренеүҙәр үткәрмәйенсә, юғары дозаларҙа витаминдар эсеүҙең файҙаһы булмауы ла ихтимал. Дьюк университетының медицина мәктәбе (АҠШ) профессоры Зоя Диана Дрэлос белдереүенсә, сәс үҫеүен көсәйтеүсе махсус витаминдар юҡ. Сәстәрҙең торошо организмдың сәләмәтлеге һәм гормондар кимәле менән бәйле. Баштың пеләшләнеүе иһә нәҫелдән күсә. Даими рәүештә ниндәйҙер витаминдар эсеү, бәлки, бер ниндәй зыян да килтермәйҙер. Шулай ҙа медицинала табип рецебынан тыш һатылған биологик өҫтәмәләрҙең файҙаһы раҫланмаған.

■ Бал - татлы ризыҡ ҡына түгел. Яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ул антибиотиктарға бирешмәй торған бактерияларға ҡаршы көрәшеүсе сара ла. Американың химиктар йәмғиәте йыйылышында иғлан итеүенсә, бал бер юлы төрлө кимәлдәге инфекцияларҙы юҡҡа сығара ала. Мәҫәлән, өҫтәлдең өҫтөн 70 процентлы спирт менән һөртөп, бактерияларҙан ҡотолорға була. Әммә кеше организмында йәшәүсе бактериялар менән көрәш ярайһы ҡатмарлы. Белгестәр фекеренсә, балдағы полифенолдар, шәкәр бактерияларҙың тиресәһен емереп, уларҙың артыуын туҡтата.

■ Стеналарға, йорт йыһаздарына, текстилгә һеңгән тәмәке төтөнө яман шешкә килтереүе ихтимал. Белгестәр раҫлауынса, үҙе сәләмәт йәшәү рәүеше алып барып та, тәмәке төтөнө менән һуларға мәжбүр булған кешенең ДНК-һы зарарлана һәм яман шеш барлыҡҡа килеү хәүефе арта. Беркли ҡалаһында урынлашҡан Милли лаборатория хеҙмәткәрҙәре әйтеүенсә, тәмәке тартҡанда һауаға 4 мең тирәһе матдә бүленеп сыға, уларҙың күп өлөшө йыһаздарға, стенаға һеңә. Был токсик матдәләр канцероген тәьҫиргә лә эйә. Азот һәм азот оксиды органик берләшмәләренән торған нитрозамин төркөмө бигерәк зыянлы. Улар ДНК молекулаһы менән берләшеп, яман шеш күҙәнәктәре үҫешен барлыҡҡа килтерә.

■ Чикаго университетында үткәрелгән яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ғаилә тормошоноң бәхетле булыу-булмауында ир-егеттең темпераменты ҙур роль уйнай. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы ғаилә парҙары үҙҙәренең темпераменты, психологик үҙенсәлектәре һәм ғаиләләге атмосфераны һүрәтләгән. Ғалимдар белдереүенсә, үҙен артыҡ талапсан, хис-тойғолары үҙгәреп тороусан, тип иҫәпләүсе ир-егеттәрҙең ҡатындары ирҙәре менән ҡәнәғәт булмай. Әгәр ҙә ҡатынының кәйефе йыш алышына икән, ир кеше ғаилә тормошонан ситләшә башлай. Төрлө ғауғаларға ҡарағанда, икенсе яртыңдың кәмселектәренә бәйләнеү, уға артыҡ талаптар ҡуйыу, сәбәпһеҙ игәү ғаиләнең ныҡлығын ҡаҡшата, ти ғалимдар. Әгәр ҙә ир кеше ғаиләлә булған бар ваҡиғаларҙы ыңғай тойғолар менән ҡабул итһә, бындай ғаилә оҙаҡ йәшәйәсәк. Ә бына ҡатындың оптимист булыуы бер нәмәгә лә йоғонто яһамай.

*МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ*

# СИТТӘН КИЛГӘН МУЛЛАЛАР...



## йолаларыбыҙға яҫҡына

**Ситтән килгән, үҙҙәрен уҡымышлы дин әһеле тип танытҡандар күп йөрөй хәҙер республика ауылдарында. Милләтте юҡ итеүгә ҡоролған һүҙҙәрен бик оҫта итеп Ҡөрьән һүҙҙәренә төрөп һөйләй белә улар. Тик, ниңәлер, урындарҙағы имамдар быға юл ҡуя, хатта ҡайһы берҙәре ситтәрҙең арбаһына ултырып, ситтәр һүҙен һөйләй башлай.**

"Ауылға бер тажик муллаһы килгәйне, өйҙәр буйлап йөрөп, стеналарҙағы атай-әсәйҙәребеҙҙең фотоларына тиклем алырға ҡушты. Иман, дин буйынса ярамай, имеш..." Бер танышым һөйләгәйне был хәбәрҙе. "Шунан, уның ҡушҡандарын үтәп, ата-әсәйҙәрегеҙҙең фотоларын алып ҡуйҙығыҙмы инде?" - тип һораным унан. "Алдыҡ инде..." - тип уфтанды әңгәмәсем.

Икенсе ауылда бер дин әһеле: "Ҡурайҙа уйнау динебеҙҙә тыйыла", - тип өркөткәс, мәктәптә ҡурай түңәрәге ябылған, тигән хәбәрҙе ишетеп тә аптырағайныҡ. Бер уйлаһаң, күптән инде таш быуатында йәшәмәйбеҙ, төрлө һындарға ла табынмайбыҙ, Аллаһтың берҙән-бер һәм мәңгелек икәнен беләбеҙ, инанабыҙ. Фанатик, наҙан муллаларҙың һүҙҙәрен ысынға алып, фотоларҙан, китаптарҙан (унда ла фотолар туп-тулы), компьютерҙан (унда фотоларҙың ниндәйе генә юҡ) баш тартып, киренән мәмерйәләргә инеп йәшәйекме инде былай булғас? Ахмаҡлыҡтың, наҙанлыҡтың юҡтыр сиктәре, тип йәнә бер ҡабатларға тура килә. Беҙҙең өсөн ҡәҙерле булған фотоларға имандың ни ҡыҫылышы бар? Әхмәтзәки Вәлиди фотоларын, Салауат һындарын да, һәйкәлдәрен дә алып ташлайыҡмы? Ҡурайһыҙ башҡорт буламы? Элек дошмандар йорттарыбыҙҙы ғына түгел, халҡыбыҙҙы тереләй яндырып, бөтөн ҡәҙерле ҡомартҡыларыбыҙҙың көлөн күккә осороп, милли хәтеребеҙҙе юҡ иткән. Хәҙер ситтән килгән наҙан муллалар үҙебеҙҙең ҡулыбыҙ менән тарихыбыҙҙы, йолаларыбыҙҙы, үҙаңыбыҙҙы емергәнен хуплап ултырайыҡмы? Бер саҡ Өфө мәсеттәренең береһендә Урта Азия тарафтарынан килгән бер мулла: "Башҡорттар, ниңә һеҙ илегеҙҙе башҡа милләттәрҙән йәлләйһегеҙ, йәлләмәгеҙ, Аллаһ ерҙе тотош кешелеккә биргән", - тип вәғәз уҡығында, "Үҙ илеңә ҡайтып, үҙ халҡыңа һөйлә был вәғәзеңде", - тип, уның был сығышына ҡаршы сығыусылар булды, тип тә һөйләгәйнеләр.

Иман, дин - яуызлыҡтан баш тартыу, яуызлыҡҡа ҡаршы көрәш, шул көрәштә Аллаһҡа таяныу, ярҙам өмөт итеү. Ата-әсәңдең, туғандарыңдың, балаларыңдың стеналағы фотолары яуызлыҡмы? Һин ул фотоларға табынаһыңмы, әллә фотолағы ҡәҙерле һындарҙы, шулай уҡ зыяраттарҙағы зат-әҡрәбәләреңдең, әүлиәләребеҙҙең рухына һәр саҡ изге теләктә булып, Аллаһ ризалығы хаҡына доғалар менән иҫләйһеңме? Эскелек, наркоманлыҡ, наҙанлыҡ, ялҡаулыҡ, тәкәбберлек, көнсөллөк, телеңә, илеңә, милли йолаларыбыҙға тоғро булмау кеүек яуызлыҡтар - бына нимәләрҙе өйҙәрҙән генә түгел, йәндәребеҙҙән алып ташларға кәрәк. Күпме кеше эскелектән үлә, күпме ир-ат өйләнмәй, донъя көтмәй, балалар үҫтермәй, йәиһә сит дин, сит тел менән никахлашып, халҡыбыҙҙың һанын кәметә - бына былар иманға ла, дингә лә һыймай. Бер ваҡыт туған тейешле кешемдең ҡыҙы менән һөйләшкәндә үҙ халҡыңдың егете менән никахлашыу тураһында аңлаттым. "Һин башҡа милләтәрҙе яратмайһыңмыни?" тине миңә был балаҡай. Һәм, әйтергә кәрәк, беҙҙең күпселек йәштәребеҙ шулай уйлап хаталана. Былай фекерләү иҫ киткес оло хата, яңылышыу. Был осраҡта эш яратыу йәки яратмауҙа түгел. Башҡа милләтте ихтирам итеүҙе тик уртаҡ мендәр, уртаҡ юрған, икенсе төрлө әйткәндә, енси мөнәсәбәттәр менән генә раҫларға ярамай. Башҡа милләткә кешеләрсә мөнәсәбәт енси бәйләнеште һис күҙ уңында тотмай. Әллә ундай ахмаҡтар дуҫлыҡтың нигеҙе тик енси мөнәсәбәттәр, тип аңлатырға маташамы? Улай булһа - был аҙғынлыҡ. Үҙ милли йолаларыбыҙҙы, динебеҙҙе ныҡ тотоп, башҡа милләттәргә ҡәҙимгесә күрше була белеү - беҙҙең милли йолаларыбыҙҙың нигеҙе булырға тейеш. Ә яҡшы күрше булғың килһә, бөтөн яҡтан алдынғы булырға тейешһең - был закон. Милли йолаларыбыҙҙы емереүгә юл ҡуйыу - иң ҙур иманһыҙлыҡ.

Һәр халыҡты үҙ милли йолалары халыҡ итеп йәшәтә. Үзбәктәр, мәҫәлән, кеше үлгәс, сәстәрен, кейемдәрен йолҡҡолап ҡысҡырып илай, мәйетте зыяратҡа йүгертеп алып бара. Ҡаҙаҡтар үҙҙәре землянкала йәшәһә лә, яҡындарының ҡәбере өҫтөнә мөһабәт ҡоролмалар төҙөй... Төркмәндәрҙең йоҡо бүлмәһендә борондан тәҙрәләр булмаҫҡа тейеш... Ғәрәп илдәрендә ҡатын-ҡыҙҙар кейемгә төрөнөп, тик күҙҙәре генә күренеп торорға тейеш... Ә башҡорттоң йолалары икенсе. Беҙҙең башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары, мәҫәлән, ире менән бер рәттән яуға сапҡан. Был да беҙҙең борондан килгән йәшәү рәүешебеҙ. Ғәрәп ҡатындары кеүек, тотош бөркәнеп йөрөһә, атҡа атланып, дошманға ташланыу түгел, кәзә көтөргә лә эшкинмәҫ ине.

Башҡорттар сит илгә барып, берәүгә лә үҙ йолаларын көсләп индермәй. Шуның кеүек, башҡа милләттәрҙең беҙгә көсләп үҙ йолаларын тағыуға юл ҡуйырға ярамай. Бер милләт тә үҙ ғәҙәттәренән баш тартырға йыйынмай, үҙ теле, үҙ йолалары менән йәшәй, сөнки йолалар - милләттең тамыры. Халҡыбыҙҙың милли йолаларын, үҙаңын юҡҡа сығарырға тырышыусыларға ҡаршы тороу - иманыбыҙҙың нигеҙе икәнен онотмайыҡ.

**Айһылыу ХАСБУЛАТОВА.**

*ФӘҺЕМ АЛ!*

# ГОНАҺ ЭШЛӘҺӘҢ...

## тиҙ генә тәүбәңә кил

**Бер ҡалала 99 кешене үлтергән енәйәтсе йәшәгән. Бер мәл ул үҙенең гонаһтары хаҡында әсенеп уйланған һәм тәүбәгә килергә ҡарар иткән. Кәңәш һорар өсөн ҡалалағы иң аҡыллы кешене эҙләй башлаған.**

Енәйәтсегә ғибәҙәттәр менән генә мәшғүл бер монахҡа барырға кәңәш иткәндәр. Ул монахтан: "Әгәр кемдер 99 кешене үлтерһә, ул тәүбәгә килә аламы?"- тип һораған. Монах "Юҡ!" тип яуап биргән. Енәйәтсе уны ла үлтереп, ҡорбандарының һанын йөҙгә еткергән. Һуңынан, күпмелер ваҡыттан һуң, күңел тыныслығы тапмайынса, енәйәтсе тағы ла кәңәш һорар кеше эҙләргә керешкән. Уға ғилем таратып көн иткән дин ғалимына мөрәжәғәт итергә кәңәш иткәндәр. Ғалимға килеп, енәйәтсе: "Әгәр кемдер 100 кешене үлтерһә, ул тәүбәгә килә аламы?"- тип һораған. Ғалим: "Әлбиттә. Гонаһың ниндәй генә ҙур булыуына ҡарамаҫтан, кеше менән тәүбә араһында бер ниндәй ҙә кәртә юҡ", - тигән. Алдында тап шул йөҙ кешене үлтергән кешенең тороуын аңлап, ғалим: "Һин икенсе ҡалаға күс. Унда гонаһ эшләмәгән, яҡшылыҡҡа саҡырған, Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылған кешеләр йәшәй. Улар менән бергә Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт ҡыл. Әле йәшәгән ҡалаңа кире әйләнеп ҡайтма - ул һине гонаһ эшләргә этәргән урын",- тигән.

Енәйәтсе ғалимдың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалған һәм шунда уҡ юлға сыҡҡан. Юлдың яртыһын үткәс, көтмәгәндә мәрхүм булып ҡалған. Уның йәнен алырға күктән ике төркөм фәрештәләр төшөрөлгән. Беренсе төркөмдә - Аллаһы Тәғәләгә инаныусыларҙың йәнен алыусылар булһа, икенсе төркөмдә Аллаһы Тәғәләгә инанмаусыларҙың, гонаһлы кешеләрҙең йәндәрен алыусы фәрештәләр була. Улар енәйәтсенең үле кәүҙәһе янында үҙ-ара бәхәскә инәләр. Тәүгеләре: "Был кеше тәүбәгә килде һәм бар күңеле менән Аллаға юлланды", - тип раҫлаған. Икенсе төркөм фәрештәләр: "Ул бер ниндәй яҡшылыҡ та эшләмәне!"- тип ҡырт киҫкән. Һөҙөмтәлә, бәхәсте хәл итеү өсөн күктән тағы бер фәрештә ебәрелгән. "Мәрхүмдең әжерен тапҡан урыны менән сығып киткән ҡалаһы һәм юлланған ҡалаһы араһын иҫәпләгеҙ. Ҡайһыныһына юл яҡыныраҡ, ул шулар иҫәбенә инер", - тигән фәрештә. Фәрештәләр юл оҙонлоғон иҫәпләгән һәм мәрхүм йүнәлгән урынға юл яҡыныраҡ булыуы асыҡланған. Һәм уны әхирәткә Аллаһы Тәғәләгә инаныусыларҙың йәнен алыусы фәрештәләр алған.

**Был ғибрәтле риүәйәт гонаһ эшләргә саҡырмай, киреһенсә, әгәр гонаһ эшләгәнеңде аңланың икән, шунда уҡ тәүбәгә кил, үҙгәрергә тырыш һәм гонаһыңа әйләнеп ҡайтма, тип нәсихәт бирә. Шулай уҡ нәсихәт һораясаҡ кешеләрҙе лә дөрөҫ һайларға саҡыра.**

АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО

**Беҙҙең Учалы яҡтарында ла тормошобоҙға йәм һәм мәғәнә өҫтәгән "Ағинәйҙәр ҡоро" матур ғына итеп эш башлап ебәрҙе. Зыялы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ февралдә үткән ҡорҙарында үҙҙәрен борсоған мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшеп, киләсәккә эштәрен планлаштырҙы. Төп бурыстарҙың береһе - ауыл тормошон йәнләндереү, уға ҡот өҫтәү, йәш быуынды тәрбиәләү, рухи ҡиммәттәрҙе, башҡорт халыҡ традицияларын һаҡлау. Ағинәйҙәр тәрбиә эшендә миҙгел байрамдарын, экологик өмәләр кеүек күмәк эш төрҙәрен тергеҙеп, уларҙы бөтә ауыл менән үткәреү, ағинәйҙәрҙең һәм аҡһаҡалдарҙың тәрбиә мәктәбен ойоштороу, кис ултырыу, ҡул эштәренә өйрәнеү кеүек сараларҙы файҙаланырға кәрәклеген дә билдәләне.**

# АУЫЛДАРЫБЫҘҒА ХУЖА БУЛАЙЫҠ!

## Был саҡырыу бар тарафҡа тарала

Юлдаш ауылында "Ағинәйҙәр ҡоро"н Абдуллина Әлфиә Борхан ҡыҙы етәкләй. Халыҡ гәме менән йәшәгән ағинәй ауыл тормошон йәнләндереү буйынса эштәргә дәррәү әйҙәй халыҡты, уларҙы дәртләндерә. Өләсәйҙәр, әсәйҙәр һәм килендәр бергә йыйылып, ҡул эштәренә, бәйләм серҙәренә өйрәнә, шул ыңғайҙан өгөт-нәсихәт мәктәбен дә аҡыллы ғына итеп алып бара. "Хәҙер инде мәктәптә уҡып ҡына йөрөгән балалар ҙа беҙҙең янға йыйлыша, беҙҙең нәсихәттәрҙе тыңлай, ҡул эштәренә өйрәнергә теләгәндәр ҙә бихисап, - тип ҡыуанысын йәшермәй Әлфиә Борхан ҡыҙы. - Күптән түгел ауыл халҡын клубҡа йыйып, "Быуындар бәйләнеше" кисәһе үткәрҙек. Был көндө мәҙәниәт йортонда алма төшөрлөк тә урын булманы. Оло быуын ауылдаштары күрһәткән хөрмәткә күҙ йәше аралаш рәхмәтен белдерһә, йәш быуын яҡындары менән ысын-ысындан ғорурлыҡ тойғолары кисерҙе, тырыш хеҙмәттең, яҡшылыҡтың, изгелектең ерҙә ятып ҡалмауына инанды. Сараға әҙерлек барышында бөтә ауыл ҡайнап торҙо, тиһәм дә, арттырыу булмаҫ..." "Ағинәйҙәр ҡоро" ойошторған байрамдың бәсен күтәреп, хакимиәт башлығы Фазила Әмин ҡыҙы физәҡәр хеҙмәт юлы үткән илле инәйҙең иңенә сәскәле яулыҡтар ябып ҡыуандырған. Уға ла рәхмәтле Әлфиә Борхан ҡыҙы. Эскелек менән көрәшеү юлдарын да үҙҙәренсә планлаштырып торалар әле улар. Ауылда "Иң айыҡ аймаҡ" бәйгеһен иглан итергә уйлайҙар.

Мулдаҡай, Илсе, Ҡунаҡбай, Кәкүк ауылдарындағы ағинәйҙәр үткән ял көндәрендә миҙгел байрамдарын нарыҙдан башлап ебәрҙе. Кәкүк ауылында үткән байрамға райондың башҡа ауылдары ағинәйҙәре лә, Учалы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Ләйсән Нурмөхәмәт ҡыҙы ла барҙы. Былтыр "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашып, маҡтау ҡағыҙы, аҡсалата премия алған Кәкүк ауылында ысынлап та ихлас, әүҙем халыҡ йәшәй. Кескәй генә төҙөк, матур ауыл килгән ҡунаҡтарҙы тәбиғәте менән дә, матур күңелле кешеләре менән дә һоҡландырҙы. Ауылдың ағинәйе Роза Мил ҡыҙы Мирсәйетова байрамға барлыҡ ауылдаштарын йәлеп иткәйне. Оло ағинәйҙәрҙән ризалыҡ алып, йәштәр байрам ебәрҙе байрамды. Оло инәйҙәр Вәлиева Зәйтүнә, Вәлиева Хәсибә, Мәғәфүрова Гәйшә, Сафина Нурия, Мирсәйетова Флүзә башта байрамдың тарихы менән таныштырҙылар. Төрлө һынауҙар үткәреп, йәштәрҙең тапҡырлығын, зирәклеген баһаланылар. Мәктәптең физкультура уҡытыусыһы Әмиров Сәхиәр менән берлектә төрлө уйындар уйнаттылар, ҡар өҫтөнән футбол тубы тәгәрәттерҙеләр, тоҡ кейҙереп тә йүгерттеләр, ағас аттарҙа ла сабыштырҙылар, арҡан да тартыштырҙылар, мәргәнлектә лә көс һынаштырҙылар. Олоһо, кесеһе, ир-ат, ҡатын-ҡыҙ - һәр ҡайһыһы сәмләнеп, етеҙлектә, отҡорлоҡта үҙен һынаны. Ул арала еңгәләр ҡойған ҡоймаҡтан, башҡа тәм-томдан ауыҙ итеп, ҡайнар сәй менән дә һыйландылар. Һаламдан эшләнгән Ҡыш бабайҙы яндырып алдынан үткән йылда торғоҙоп ҡалдырылыҡ теләктәрҙе лә теләргә онотманылар. Яуызлыҡ, эскелек тигән насар ғәҙәттәр, халыҡты йонсотҡан эшһеҙлек тороп ҡалһын, илдә етемдәр булмаһын, йылдарыбыҙ именлеге, тыныслығы, бәрәкәте менән генә килһен, тигән теләктәрҙе олоһо ла, кесеһе лә теләне.

Абҙаҡ ауылындағы "Ағинәйҙәр ҡоро"н Әнисә Талип ҡыҙы Камалетдинова, Һарт ауылындағыһын Әнүзә Сабирьян ҡыҙы Шакирова етәкләй. Ауылдар икеһе лә ағинәйҙәренән уңды, икеһендә лә улар әүҙем эшләй. "Ауыл халҡы үҙҙәре "Ағинәйҙәр ҡоро"на ағза итеп алыуҙы һорап килә башланы", тип, башлаған эштәренән ҡәнәғәт булып торалар. Икеүһенең дә киләсәккә матур пландары, башҡараһы эштәре булыуы ҡыуандыра.

Һуңғы йылдарҙа ауылдарыбыҙ һүнеп барған усаҡ һымаҡ була башлағайны бит. Ауыл кешеләре эшһеҙлектән дә, аҡсаһыҙлыҡтан да, сараһыҙлыҡтан да аптыранып йөрөй ине. Бына хәҙер улар заман дилбегәһен үҙ ҡулына алырға, үҙ тормошондо үҙең ҡорорға икәнен аңлай башланы. Иң тәүҙә зыялы ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәр - ағинәйҙәр һәм аҡһаҡалдар әүҙемләште һәм башҡаларға "Әйҙәгеҙ, үҙ еребеҙгә, үҙ ауылдарыбыҙға үҙебеҙ хужа булайыҡ!" тигән саҡырыу ташланы. Ул саҡырыу хәҙер бөтөн район ауылдарына тарала - шуныһы шатлыҡлы

**Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА, Учалы районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының "Ағинәйҙәр ҡоро" рәйесе.**



Учалы районы ағинәйҙәре.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

### Әгәр компетентлы булһағыҙ, кешеләр һеҙгә ылығыр

Беҙ барыбыҙ ҙа, улар ювелир оҫталары булһынмы, донъя кимәлендәге спортсымы йәки уңышлы эшҡыуармы - юғары компетентлыҡ күрһәткән кешеләргә һоҡланабыҙ. Әммә ысынбарлыҡта барыбыҙға ла компетентлыҡ буйынса башҡаларҙы уҙып китер өсөн Фаберже, Майкл Джордан йәки Билл Гейтс булырға кәрәкмәй. Әгәр үҙегеҙҙә ысынлап та ошо сифатты үҫтерергә теләһәгеҙ, түбәндәге кәңәштәргә ҡолаҡ һалығыҙ:

**Һәр көн компетентлы булығыҙ.** Сабыр иткән - моратына еткән, тигән мәҡәл бар. Әммә ҡайһы берҙә кеше үҙенең хыялындағы маҡсатын тыныс ҡына көтә һәм ахырҙа уға өлгәшергә бер ниндәй теләге лә ҡалмай. Яуаплы кешеләр нимәләр көткәндә ҡул ҡаушарып ултырмай, ә үҙҙәрен күрһәтә. Ләкин ысын мәғәнәһендә компетентлы кешеләр бер аҙымға алда бара. Улар үҙҙәренең теләктәрен күрһәтеп кенә ҡалмай, ә уларға өлгәшеү өсөн, кәйефтәренә, ниндәй шарттар булыуға, ниндәй ауырлыҡтар осрауға ҡарамаҫтан, көн һайын уларҙы тормошҡа ашырыу дәрте менән яна.

**Камиллашыуҙан туҡтамағыҙ.** Барлыҡ ысын компетентлы кешеләр бер туҡтауһыҙ уҡый, үҫә һәм камиллаша. Улар быға үҙҙәренә берҙән-бер "Ни өсөн?" тигән һорау биреп өлгәшә. Ахырҙа, нимә һәм нисек эшләргә белгән кеше һәр саҡ эш табасаҡ, ә ни өсөн эшләргә кәрәк икәнен белгән кеше һәр саҡ етәксе буласаҡ.

**Һәр эште аҙағына еткерегеҙ.** Минең бер ваҡытта ла үҙен компетентлы тип иҫәпләгән һәм эшен аҙағына еткермәгән кешене күргәнем булманы. Уилл А. Фостер: "Сифат бер ваҡытта ла осраҡлы ғына барлыҡҡа килмәй; ул һәр ваҡыт аныҡ ниәт, ихлас тырышлыҡ, аҡыллы етәкселек һәм эште еренә еткереп башҡарыу һөҙөмтәһе; ул бик күп альтернативалар араһынан аҡыллы һайлау аша өлгәшелә". Юғары сифат кимәлендә эшләү - ул һәр ваҡыт аңлы һайлау, ихтыяр.

**Мөмкинлегегеҙҙән күберәкте эшләгеҙ.** Ысын мәғәнәһендә компетентлы кешеләр кәрәк булғандан арыраҡ баралар. Улар өсөн яҡшы күренгән нәмә бер ваҡытта ла ныҡ яҡшы булмай. Үҙенең "Урта йәштәрҙәге ир-ат көрсөгө" китабында Джим Конвей, ҡайһы бер кешеләр ҙур кеше булыу ихтыяжының һәм тойғолар үҫешенең кәмеүен кисерә һәм "яҡшыраҡ эшләйем, әммә артығын тырышмайым", тип уйлай. Лидерҙар үҙҙәренә былай уй уйларға ла рөхсәт итергә тейеш түгел. Улар үҙҙәренең эшен эшләргә һәм өҫтәмә рәүештә тағы ла нимәләр башҡарырға, быны көн һайын үтәргә тейеш.

**Башҡаларҙы илһамландырығыҙ.** Ысын компетентлы лидерҙар үҙҙәренең шәхсән бурыстарын юғары кимәлдә башҡарыу менән генә сикләнергә тейеш түгел. Улар үҙҙәренең артынан эйәреүселәрҙе лә шулай эшләргә илһамландыра һәм дәртләндерә. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы берәүҙәр үҙҙәренең шәхсән үҫешкән оҫталыҡтары йәшәргә мөмкинлек бирә тип уйлаһа, һөҙөмтәле лидерҙар оҫталыҡтарын юғары компетентлыҡ менән үреп алып бара һәм үҙ ойошмаларын камиллыҡтың һәм йоғонтололоҡтоң яңы кимәленә сығара.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БОРАЙ РАЙОНЫ




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**14-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Поварисов. Хәйретдинов. Импала. Күнәк. Сауҡа. Авсахов. Морон. Рахманов. Идара. Сталактит. Тираж. Мостафин. Дог. Тибр. Аят. Фристайл. Абдуллина. Артыш. Академик. Муйын. Ҡуян. Пальма. Турнепс. Какаду. Комета. Фатихов. Бант. Сәйетова. Мунса. Бронза. Ләғәли. Нокаут. Опто.

**Вертикаль буйынса:** Дауа. Иори. Хаин. Свитер. Аршын. Нәбиуллин. Парса. Ситса. Аҙамат. "Ауди". Бирт. Кипр. Скипетр. Онҡо. Стоунхендж. Кито. Кворум. Файҙа. Адажио. Омар. Картуф. Ишара. Матрос. Дәһшәт. Терпе. Фата. Монарх. Нейлон. Карпов.

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

## ӘХИРӘТ ИМЕНЛЕГЕНӘ ӨЛГӘШ

Ҡудси хәҙистә Аллаһы Тәғәлә әйтә: "Үҙемдең бөйөклөгөм менән ант итәм, Мин ҡоломда бер юлы ике ҡурҡыу менән ике именлекте бергә ҡушмаясаҡмын. Кем Минең язамдан был донъяла ҡурҡа (Аллаһы Тәғәләгә ышана, уның әмерҙәрен үтәп йәшәргә тырыша, гонаһтар эшләмәй), уға Мин әхирәттә именлек вәғәҙә итәм. Кем үҙен был донъяла уҡ имен, Аллаһы Тәғәләнән бойондороҡһоҙ тоя (Аллаға, үлгәндән һуң терелтелеүенә ышанмай, Раббыһы ҡушҡандарына битараф, Ҡиәмәт хаҡында уйланмай, шул арҡала, ғәмәлдәрем өсөн яуап тотмаясаҡмын, тип гонаһтар һәм енәйәттәр ҡыла) ул мәңгелек донъяла бөтмәҫ ҡурҡыу ейәсәк".

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1435 һижри йыл.*

| Апрель (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 14 (14) дүшәмбе | 5:48 | 7:18 | 14:30 | 19:45 | 21:15 | 22:45 |
| 15 (15) шишәмбе | 5:46 | 7:16 | 14:30 | 19:47 | 21:17 | 22:47 |
| 16 (16) шаршамбы | 5:44 | 7:14 | 14:30 | 19:49 | 21:19 | 22:49 |
| 17 (17) кесе йома | 5:41 | 7:11 | 14:30 | 19:51 | 21:21 | 22:51 |
| 18 (18) йома | 5:39 | 7:09 | 14:30 | 19:53 | 21:23 | 22:53 |
| 19 (19) шәмбе | 5:36 | 7:06 | 14:30 | 19:55 | 21:25 | 22:55 |
| 20 (20) йәкшәмбе | 5:34 | 7:04 | 14:30 | 19:57 | 21:27 | 22:57 |

*"Дини тәҡүим"дән алынды.*

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге башҡорт дәүләт академия драма театры

**12 апрель "Аҡ пароход"** (С.Айытматов), драма

**13 апрель "Бәхет хаҡы"** (Х.Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

**18-19 апрель ПРЕМЬЕРА "Мин - ҡатынҡыҙ"** (Т.Миңнуллин), бишек йыры

**20 апрель "Ғәфү ит мине!"** (И.Герман), мелодрама

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**12 апрель "Чиполлино"** (Д.Родари), мажара. Башлана 15.00

**15 апрель "Ун өсөнсө йондоҙ"** (В.Ольшанский), ирекле һәм мөхәббәт тураһында хикәйәт. Башлана 16.00

**16 апрель "Сырҡылдаҡ себен"** (Р.Ураҡсина), әкиәт. Башлана 11.00

**17 апрель "Ун икенсе төн"** (У.Шекспир), комедия

**18 апрель "Алтын балта"** (С.Сурина), әкиәт. Башлана 11.00

**18 апрель "Яҙыу еңгән мөхәббәт"** (М.Кәрим), лирик комедия. Башлана 16.00

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**17 апрель "Гонаһлы хыялдарым"** (Ф.Ғәлимов), комедия

**18 апрель** Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, "Рәсәй тауыштары" Бөтөн Рәсәй конкурсы лауреаты **Ғафуан Фәзуллиндың юбилей концерты**

**19 апрель "Китмәҫкә килгән ҡошом"** (Э.Йәһүҙин), комедия

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ҠАРМАҠҠА ТОТОНМАЙ ТОР...

**15 апрелдән алып 10 июнгә тиклем - ыуылдырыҡ сәсеү ваҡытына - Башҡортостанда сәнәғәт балыҡсылығына сикләүҙәр индерелә.**

БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының матбуғат хеҙмәтендә аңлатыуҙарынса, спорт һәм һәүәскәр балыҡсылыҡҡа ҡарата 1 майҙан алып 10 июнгә тиклем сикләүҙәр ҡаралған. Павловка һыуһаҡлағысында балыҡ тотоуға тыйыу боҙ әрселеү ваҡытынан алып 10 июнгә тиклем дауам итә. Бындай сикләүҙәр йыл һайын ыуылдырыҡ сәсеү ваҡытында уңайлы шарттар булдырыу һәм һыу яткылыҡтарында балыҡтар запаһын тулыландырыу өсөн индерелә. Ыуылдырыҡ сәсеү ваҡытында йылғалар һәм күлдәр, һыуһаҡлағыстар буйлап моторлы йөҙөү сараларында хәрәкәт итеү ҙә тыйыла. Министрлыҡта билдәләүҙәренсә, был ике ай дауамында республикала һыу ятҡылыҡтарын тикшереү көсәйтеләсәк. Былтырҙан алып балыҡ тотоу ҡағиҙәһен боҙоуға ҡарата административ штрафтар ҙа арттырылған.

## ...Ә ҺУНАР ИТЕРГӘ МӨМКИН

**19 апрелдә Башҡортостанда һыуҙа йөҙөүсе һәм ҡырағай урман кейектәренә яҙғы һунар миҙгеле асыла.**

Был ваҡыттан алып өйрәктәргә, вальдшнептарға, ҡаҙҙарға, ҡор һәм һуйырҙарға һунар рөхсәт ителә. Шул уҡ ваҡытта был төрҙәрҙең инә ҡоштарына һунар тыйыла.

БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, бөгөнгә көнгә һыуҙа йөҙөүсе һәм ҡырағай урман кейектәрен аулауға 500-ҙән ашыу рөхсәт бирелгән. Яҙғы һунар 28 апрелдә тамамланасаҡ.

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ЫРЫМБУРҘАР ҠУРАЙҘА ӨЙРӘНӘ

**"Рәсәй Федерацияһы башҡорттары" дәүләт программаһын тормошҡа ашырыу сиктәрендә Ырымбур өлкәһендә ҡурай буйынса оҫталыҡ дәрестәре үтте.**

Сара өлкәнең Александровка районының Иҫәнгилде һәм Төйләгән районы Аллабирҙе ауылдарында ойошторолдо. Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының өҫтәмә һөнәрҙәр укытыусыһы Юнир Һағынбаев 9 көн буйына 10-16 йәшлек балаларға ҡурай уйнарға өйрәтте. Ҡурай серҙәренә төшөнөргә теләүселәрҙең һаны 40 кешегә етте. Оҫталыҡ дәрестәре өлкәнең ауылдары халҡы ҡатнашлығындағы ҙур концерт менән тамамланды.

# ИХЛАСЛЫҠ МЕНӘН АЛДЫРҘЫ

**"Тамыр" студияһы режиссеры Гөлназ Ғәлимуллинаның билдәле спортсы Ирек Зарипов тураһындағы фильмы "Красногорский" Халыҡ-ара спорт киноһы фестивалендә "Рухтары менән көслө" номинацияһында еңеү яуланы.**

"Красногорский" кинофестивале 2003 йылдан үткәрелә. Быйылғы бәйге программаһында 23 илдән 80 нәфис һәм документаль фильм тәҡдим ителгән. Фестивалдең президенты, легендар фигурист Ирина Роднина фестивалдә ҡатнашыусы эштәрҙең йылдан-йыл сифатлыраҡ, ҡыҙығыраҡ һәм ихласыраҡ була барыуы тураһында билдәләп үтте. Гөлназдың "Гүмер һаны" фильмы ихласлығы менән алдыра ла инде. Шулай ҙа йәш режиссер фестивалдәге уңыш геройы Ирек Зариповтың өлөшө, тип иҫәпләй.

Гөлназ Ғәлимуллина фильмды Ирек Зарипов Туриндан ҡайтҡас төшөрә. "Был ваҡытта Ирек бәләкәй ҡаланан сыҡҡан спортсы булараҡ ҡына билдәле ине. Ысынбарлыҡта иһә, уның кеүек кешеләр көн һайын ҡаһарманлыҡ яһауcы геройҙар. Фильмды төшөргәндә минең өсөн ошо тәрән идеяны тамашасыға еткереү мөһим ине, - тип хәтерләй автор. - Эшемдең ниндәйҙер баһаға лайыҡ булыуы беҙҙең, журналистарҙың тырышлығы юҡҡа түгеллеген раҫлай. Фестивалдән бик ҡәнәғәтмен".

Әле Гөлназ Ғәлимуллина Мәскәүҙә йәшәй һәм эшләй. Ҡыҙыҡ яҙмышлы кешеләр тураһындағы "Профилдәр" авторлыҡ проектын дауам итергә ниәтләнә.

# КИТАПХАНАҒА КИЛЕГЕҘ!

**Өфө "Библиотөн" Бөтөн Рәсәй акцияһына ҡушыла. 25 апрель Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала үҙенсәлекле сара үтәсәк. Унда Рәсәй мәҙәниәтенең төрлө осороna - боронго батырҙар тураһындағы эпик йырҙар дәүеренән, рус әҙәбиәтенең Алтын һәм Көмөш быуаттарынан алып бөгөнгө көнгә тиклем сәйәхәт итергә буласаҡ.**

Сараның төп маҡсаты - белем сығанағы булған китапҡа ҡыҙыҡһыныу уятыу, китап уҡырға ратыусыларҙың һанан арттырыу. "Библиотөн" мәлендә махсус ойошторолған байрамда ҡатнашырға, театрлаштырылған тамаша һәм киносеанс ҡарарға, күргәҙмәләр менән танышырға, китапхананың ябыҡ фондына экскурсия ҡылырға, яҙыусыларҙан автограф-тар алырға мөмкин буласаҡ. Балаларға шулай уҡ үҙенсәлекле программа әҙерләнгән, улар өсөн махсус уйын бүлмәһе ойошторола. Был кистә "Библио-кафе" һәм хатта "Библиоматурлыҡ салоны" эшләйәсәк.

БР-ҙың Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаһы һеҙҙе 25 апрель көнө 19 сәғәттән 24 сәғәткә тиклем Ленин урамы, 4 адресында көтөп ҡала.

# ӘБЙӘЛИЛДӘ ЙЫР БӘЙГЕҺЕ

**Әбйәлил районы үҙәгендә башҡорт йырҙарын башҡарыусыларҙың БАССР-ҙың атҡаҙанған йырсыһы, халыҡ йыраусыһы Бибикамал Мәһәҙиеваның тыуыуына 100 йылға арналған республика зона конкурсы үтте.**

Аскар ауылында үткән йыр бәйгеһенә Әбйәлил, Баймаҡ, Ейәнсура, Учалы райондарынан һәм Сибай ҡалаһынан 40-тан ашыу башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусы йыйылғайны. 16 йәшкә тиклемге категорияла Гран-прины 1-се Аскар мәктәбе уҡыусыһы Индира Шаһимәрҙәнова яуланы. Өлкән йырсылар араһында иң оҫтаһы тип Баймаҡ районынан Фәттәх Аралбаев танылды.

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# ЭСЕ КӨПТӘЙ, АЯҒЫ ЕПТӘЙ...

**Беҙҙең Көйөргәҙе районы төбәгендәге халыҡтың һөйләшендә бына ошондай матур һүҙбәйләнештәр бар. Уларҙың йөштәребеҙ һөйләшендә юғала барыуы борсолдора. Күрәһең, улар уҡыған башҡорт теле дәреслектәрендә бындай һүҙбәйләнештәр юҡтыр.**

**Ҡырым сиреүендәй** - "бик күп" мәғәнәһендә;
**илле алла, ҡырҡ мулла менән** - ауырлыҡ менән, саҡ-саҡ;
**ҡырҡ ата балаһы** - төрлө кеше, йыйылған халыҡ;
**ҡара сурнай** - оҙон ҡап-ҡара кеше;
**алыптай** - бик ҙур (Алып - ул бәһлеүән, атлант);
**ата шайтан** - тиктормаҫ ҙур;
**эсе көптәй, аяғы ептәй** - ҙур эсле, нәҙек аяҡлы;
**Әстерханға китеү** - ни эшләргә белмәй, бушты-бушҡа ауҙарып йөрөү;
**эс-бауыр өҙөлөү** - ҡайғырыу, борсолоу;
**ҫинмәй** - аҡылһыҙ, иҫһеҙ;
**эт эсәгендәй** - уғата оҙон;
**быстик ҡына** - үтә лә әҙ;
**ҡамыт аяҡ** - кәкре аяҡ;
**ағас тел** - йүнле һүҙ һөйләй белмәүсе;
**аскернәй** - ныҡ асыҡҡан;
**алъюсыҡҡа** - тиктәҫкә, бушҡа;
**мөстән** - оҙаҡ ваҡыт өйгә ҡайтмай йөрөгән кеше;
**мөнтәү** - бер нәмәһен ҡалдырмай киҫеп бөтөрөү;
**тыртанлау** - һикерәнләп йөрөү;
**гарҡ бурғансы** - туйғансы;
**сарбайлап** - ҡысҡырып, һөрән һалып;
**төрәндәй аяҡ** - ҙур аяҡ.

**Хәлиҙә АЛТЫНБАЕВА .**

ЙОЛАҢДАН ЙҮН ТАП!

# "ШЫМҒА БАРЫУ"

**Халҡыбыҙҙың ҡыҙыҡ-ҡыҙыҡ йолалары булған һәм онотолоп бөткән. Ә шулай ҙа уларҙы хәтерҙә тергеҙергә булалыр. Әйҙәгеҙ, һәр беребеҙ үҙ хәтерендә ҡаҙынып, бала саҡта олатай-өләсәйҙәрҙән, өлкән кешеләрҙән ишеткәндәрҙе тергеҙәйек әле, тип мөрәжәғәт итәм гәзит уҡыусыларға.**

Бына мин үҙем яңыраҡ ҡына "Шымға барыу" йолаһы тураһында иҫкә төшөрҙөм. Кемдер ниндәйҙер һорауға яуап алғыһы, юғалған малының эҙенә төшкөһө килһә, "шымға" барған. Был шулай башҡарылған: ул бер нисә өй янына барып, өй эсендәгеләрҙең нимә һөйләшкәнен, эшләгәнен шым ғына тыңлап торған да, үҙенсә юраған һәм һығымта эшләгән.

Бер шулай Ғафури районы Яугилде ауылында йәшәгән әбейемдең (ул саҡта Тайыштa йәшәгән була) күҙ терәп торған кәзәһе юғала. Ауыр ваҡыттар, аслы-туҡлы йәшәйҙәр... Балаларҙы аҡтан мәхрүм итеп булмай бит инде, "шымға" барып килә был. Бер өй эргәһенә барып тыңлап тора, шунан икенсеһенә китә. Хужалар ит ашап ултыралар икән. Ҡайта ла әбейем: "Булманы, ошолайтып (ҡулдарын терһәгенә тиклем һыйпап күрһәтә) ит ашап ултыра күршеләр. Кәзәләрен һуйғандар. Ә беҙҙең кәзәне бүре ашаған, күрәһең", - ти. Күршеләре ашаған кәзәнең үҙенеке икәне әбейемдең башына ла инеп сыҡмағандыр инде...

**Люциә ЯХИНА.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# НАМЫҪЛЫ БУЛҺАҢ...

## намыҫһыҙ менән буталма

Наҙан "Мин еңдем" тиер, белемле "Юл бирҙем" тиер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Әгәр ҙә ылыҡтырғыс нәмәләргә ҡаршы тора алмаясағымды аңлаһам, мин тиҙерәк улар янынан ҡасыу яғын ҡарайым.

**(Мэй Уэст).**

Аҡыл өсөн рәхмәттән дә яҡшыраҡ күнекмә юҡ. Рәхмәт белдереүҙән кеше шундай эске ҡәнәғәтләнеү ала һәм һинең бар теләктәреңдә үтәп тә ҡуя.

**(Джозеф Аддисон).**

Көтөп ала белгәндәргә барыһы ла килә.

**(Бенджамин Дизраэли).**

Компетентлыҡ - ул лидерҙың нимә кәрәк, шуны аңлатып бирә белеүен, нимә кәрәк, шуны планлаштыра алыуын, нимә кәрәк, шуны эшләй алыуын аңлата.

**(Джон Максвелл).**

Кеше бер ваҡытта ла бик насар, йә бик һәйбәт булмай.

**(Франсуа Ларошфуко).**

Ҡатын-ҡыҙҙар бер-береһенә ауыһыҙ.

**(Симона Бовуар).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше ғүмере аҙағында бик ныҡ бөлөп, фәҡирләнеп, мохтажлыҡта ғүмер иткән. Уның мосолман йолаһы буйынса ҡорбан салырлыҡ бер баш малы ла ҡалмаған. Фәҡирлеге арҡаһында ул дини йолаларҙың береһен дә үтәй алмай көн иткән.**

**Бер саҡ уның эргәһенә ауыл муллаһы килгән һәм нәсихәт уҡый башлаған. "Ни өсөн һин дини йолаларҙы үтәмәйһең?- тигән ул фәҡиргә. - Әгәр ҙә һинең ҡорбан итеп салырға малың юҡ икән, күршеләреңдән алып тор, моғайын, улар баш тартмаҫ. Унан һуң, һинең бит туған-тыумасаларың бик ишле, ниңә һин уларҙан алып тормайһың ҡорбан өсөн малды? Әгәр ҙә күршеләреңдән һорап торғоң йә туғандарыңдан талап иткең килмәй икән, кемдәндер бурыска алып тор..."**

**Фәҡир муллаға бер аҙ ҡарап тора ла, шулай ти: "Юҡ, ҡартайған көнөмдә хәйер һорауcы булғым килмәй, мин береүҙән дә бер нимә лә бурыска алмаясаҡмын. Туғандарымдан байлыҡтарын минең менән бүлешеүҙе лә талап итә алмайым, улайһа мин талауcыға әйләнәм бит. Унан һуң, түләй алмаҫымды белә тороп, мин нисек бурыска алырға тейешмен әле ул малды? Юҡ инде, әгәр ҙә миңә бурыслы булып үлергә яҙған икән, Алла алдында ғына бурыслы буласаҡмын..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 11 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5153
Заказ 1161